*Буласаҡ кейәү тураһында ошо ете нәмәне бел: белеме ниндәй, ата-әсәһе, дуҫтары кемдәр, холҡо нисек, баймы, матурмы һәм нисә йәштә - ошо һорауҙарыңа ҡәнәғәтләнерлек яуап алһаң, ҡыҙыңды ике лә уйламай, уға кейәүгә бир.*

*( Боронғо һинд аҡылы).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20 - 26 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №47 (413)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Аяҡлы энциклопедия, тиҙәр**

Рамазан Үтәғолов тураһында



**6**

**"Урал батыр"ға нисә йәш,**

йәки Халыҡ хәтере яҙма документтарҙан гүмерлерәк



**7**

**Йәштәребеҙ араһында айыҡлыҡ модала,**



**8-9** тик ата-әсәләр араһында ошоно ҡабул итмәүселәр бар

**Автомобиль йөрөтөүселәргә...**

мәшәҡәттәр ҙә, сығымдар ҙа арта



**12**

**14 ТВ-программа**


### ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## "Демократия" һәм "федерация" һүҙҙәре телмәрҙән төшөп ҡала башланы. Был нимәгә ишара?

***Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ, филология фәндәре докторы, профессор:*** "Демократия" һүҙенә һалынған төшөнсә беҙҙә хәҙер сикһеҙ һәм ярҙарһыҙ киң мәғәнә алды. Уны "открытость" алмаштырҙы. Ярым шәрә, шәрә йөрөү ҙә шуға инә. Телевидениела, кинола ла, әҙәбиәттә, "һары матбуғат"биттәрендә эротиканы пропагандалау ҙа - "открытость". Асылда, беҙ бынан теүәл алтмыш йыл элек АҠШ-тың тышҡы разведка шефы Ален Даллестың беҙҙең илебеҙ халҡын аҙҙырыу юлы менән енеү хаҡындағы хыялын уңышлы ғәмәлгә ашырабыҙ. Аҡылға һыймаҫлыҡ. Мин шуға аптырайым. Республикабыҙҙа Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай, РФ-да Дәүләт Думаһы, Федерация советы, унда ла, бында ла законлы хөкүмәттәр, конституцияларыбыҙ гаранты булған ике президентыбыҙ бар. Ни өсөн халыҡты аҙҙырыуҙы тыйыу сараһы күрелмәй? Әллә көстәре етмәйме? Әллә шул хәлдәрҙе улар ҙа демократия атрибуттары тип беләме? Әллә...

Рәсми кимәлдә лә, түбәнерәктәрендә лә, матбуғат баҫмаларында ла "Рәсәй Федерацияһы" тип әйтер урынға "Рәсәй" һүҙе йышыраҡ ҡулланыла башлауы ла һағайта. Был һүҙ янғыҙы ҡулланылғанда башҡорт, татар һәм империя ҡулы аҫтында быуаттар буйы иҙелеп йәшәгән башҡа халыҡтар аңында "империя"тигән һүҙ менән ассоциялаша. Икенсе яҡтан, "федерация" һүҙен ҡулланмау, Рәсәй Федерацияһын хасил итеүсе субъекттарҙы (элекке автономияларҙы) танымау, уларҙы Тула, Пенза кеүек федерация хасил итмәүсе административ территориялар, өлкәләр кимәленә төшөрөү кеүек аңлашыла. Әллә был да губерналаштырыу идеяһын аңға һеңдерә барыу маҡсатынан аҡҡарыламы?

***Хәлил БАРЛЫБАЕВ, Рәсәй Федерацияһы Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте академияһы профессоры:*** Был һүҙҙәрҙең телмәрҙән төшөп ҡала барыуы илебеҙҙә ысын мәғәнәһендәге демократияның һәм ысын мәғәнәһендәге федерализмдың кәмей барыуын, был һүҙҙәрҙең мәғәнәләре түбәнәйеүен күрһәтә. Икенсе яҡтан ҡарағанда, СССР тарҡалғандан һуң беҙҙә демократия һәм федерализм принциптарын тормошҡа ашырыу бит яңылыш юлдан китте. Демократия - әҙәпһеҙлеккә, мәхшәргә, дыуамаллыҡтың сәскә атыуына (бер һүҙ менән әйткәндә, "вседозволенность"ҡа - башҡортса тулы мәғәнәһен биргән һүҙен дә табып булмай), федерализм сепаратизмға әүерелде.

Хәйер, философик күҙлектән ҡарағанда, донъяла, бигерәк тә беҙҙең илдә берәй заман исем (атама) менән есем берлеге күҙәтелгәне булдымы икән? Исем мәғәнәгә, есемгә бер ваҡытта ла тура килмәй. Быны мин кемгәләр Әнүәр, тип өндәшәм, ә кем белә, бәлки, унын Хоҙай ҡушҡан һәм есеменә тура килгән исеме Халистыр. Шулай йәшәйбеҙ инде 10 процент демократик, 10 процент федерализм, 10 процент сепаратистик, тағы ла 10-шар процент әллә нәмәләр хөкөм һөргән илдә. Һәҙөмтәлә күптәр, бигерәк тә йәштәр хыялдағы уйҙырма тормош менән йәшәй башлай, дини секталарға эләгә, фантомдар, мифтар уйлап сығарып, башы ҡаңғыра.

***Мәүлит ЯМАЛЕТДИНОВ, күренекле шағир, яҙыусы:*** Был илебеҙҙең абсолют монархияға табан китеп барыуын күрһәтә. Хәҙерге сәйәсмәндәрҙең унитарлыҡты яҡлап яһаған сығыштары ла, йәштәрҙең көнсығыш халыҡтарына ҡарата нәфрәт менән ҡарап берләшеүе - былар ҙа бер үк сәйәсәттең дауам ителеше. Былар, әлбиттә, хәфаландыра. Әммә Рәсәй үҙенең империя асылын нисек кенә һаҡлап ҡалырға тырышмаһын, былай ынтылыштың аҙағы барыбер Әхмәтзәки Вәлиди әйткәнсә тамамланасаҡ, кире реакция көсө һуңғы сиктә Рәсәйҙең үҙен тарҡатасаҡ. Империялар ҡасандыр барлыҡҡа килә һәм юҡҡа сыға. Көслөк менән ил булмай.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

### УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# МИЛЛӘТЕБЕҘ СИФАТТАРЫ...

## гәзитебеҙ йөҙөндә сағылыш таба

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА, Ейәнсура районы:**

-Тормошта һәр нәмәнең үҙ үлсәме бар. Һигеҙ йыл дауамында сығып килгән "Киске Өфө" гәзитенең булмышын, бөгөн нимә менән үлсәргә була һуң?

Республиканы иңләп-буйлап үткән юлдар, онотолмаҫ осрашыуҙар, кеше күңеленә орлоҡ итеп һалған аҡыллы һүҙҙәр, ғәм осҡондары менән. Ошо гәзитте уҡып, милләтем тип янған, изге ғәмәлдәр башҡарған башҡорттарҙың артыуы менән. "Киске Өфө" - минең яратҡан гәзитем" тип әйткән матбуғат дуҫтарының күбәйеүе, ә иң мөһиме, был баҫманың үҙен халыҡтың ихтыяжына, талаптарына тап килгән милли баҫма булараҡ танытыуы менән.

**Нәзирә КӘРИМОВА, Ейәнсура районы:**

- Ерҙә кешеләр төрлө-төрлө. Кемдер мәңге ризаһыҙ, ҡәнәғәтһеҙ, һытыҡ сырайлы; кемдер үҙенә ылыҡтырып, һөйкөмлөлөк һибеп тора. Баҡһаң, беҙҙе уратып алған әйберҙәрҙең дә үҙ йөҙө бар икән. Быны, "Киске Өфө" гәзитен генә алайыҡ. Мин унда милләтебеҙҙең иң матур сифаттарын күрәм: аҡыллылыҡ, сабырлыҡ, үҙеңдең бөгөндә төшөрмәү, тура ҡарап уртаға һалып һөйләшеү, кешенең йөҙөн йыртмай ғына тәнҡитләү, кинәйәләп кенә семетереп алыу... Йәғни һәр шәхескә, һәр гәзит уҡыусыға, һәр кешегә хөрмәт тоям мин был гәзитте уҡығанда.



✔ *Әле лә уҡытыу, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге ҡағиҙәләрҙе үҙе бер ҡасан да уҡытып ҡарамаған, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә эшләмәгән кешеләр яҙа кеүек тойола миңә...*



ИШАРА

# ҠАҒИҘӘЛӘРҘЕ КЕМ ЯҘА?

**Үҙгәртеп ҡороу йылдары башланғас, бер быуаттан икенсеһенә ҡолап төшкән кеше итеп тойҙом үҙемде. "Балалар ижад йорто"нда педагог булып эшләп йөрөй инем. Бөтәһе лә үҙгәргән, яңы хаҡтар, яңы һандар барлыҡҡа килеп, бер мең, ике мең тип һанарға өйрәнергә, етмәһә, "дефолт" тип һаҡлыҡ кассаһындағы аҡсаларыңды юғалтырға тура килгән йылдар ине.**

Дүшәмбе көндө мин эшләмәйем. Аҙнаһына бер тапҡыр бирелә торған "ижад көнө". "Башыма ниңәлер ижади уйҙар инмәй", тип, поликлиникаға барып, табипҡа күренергә булдым. Сиратҡа баҫтым. "Врач больничный бирһә, бирер, бирмәһә, барыбер прогул булмаҫ", тип уйлайым. Бына ҡабул итеү бүлмәһенә индем. Йәш кенә һылыу ханымдың ҡаршыһындағы ултырғысҡа ултырҙым. Табип миңә мөләйем ҡарап: "Йә, зарланығыҙ, нимә борсой Һеҙҙе?" - тип һораны. Ә мин түбән ҡарап: "Мин эш хаҡыма зарланыр инем..." тип ысҡындырғайным, бүлмәлә тынлыҡ урынлашты. Табип ханымдың һәм шәфҡәт туташының аптыраулы ҡарашына: "45 бала уҡытҡанға бик аҙ ғына түләйҙәр..." тип, башымды күтәрмәй генә өҫтәнем ("Эш хаҡыма зарланам" тип ысҡындырыуымды үҙем дә көтмәгәйнем). Табип ҡан баҫымымды үлсәне лә: "Ярай, апай, һеҙгә больничный лист асам. Исмаһам, бер аҙна ял итерһегеҙ",- тине. Ҡәнәғәт булып, йырлай-йырлай ҡайтып барышлай юл ыңғайында ғына урынлашҡан ике мәктәпкә инеп, уҡыусы балаларға "ауырып" китеүем, түңәрәккә бер аҙна йөрөмәй торорға икәнлеген хәбәр иттем.

Бына бер аҙна ял итеп, тағы ла табипҡа индем. Ул тағы ла ҡан баҫымымды үлсәне лә: "Невропатологка күренеп килегеҙсе, 21-се кабинет", - тип йүнәлтмә бирҙе. Невропатолог: "Күҙҙәрегеҙҙе йомоп, ҡулдарығыҙҙы алға һоноғоҙ", - тине. Аҙаҡ бәләкәй сүкеш менән тубыҡтарыма һуҡҡыланы ла, минең карточкама "Дауалауҙы дауам итергә" тип яҙып ҡуйҙы. Нимә тип әйтергә лә белмәй, үҙемдең табибыма яҙыуҙы күрһәттем. Ул: "Кем 45 бала уҡытырға ҡуша икән һеҙгә? Үҙе уҡытып ҡарамаған кешелер ул", - тип, тағы бер аҙнаға ял бирҙе. Бик күп йылдар үтһә лә был ҡыҙыҡ та, ҡыҙыҡ түгел дә ваҡиға онотолмай ҙа ҡуя...

**Әле лә уҡытыу, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге ҡағиҙәләрҙе үҙе бер ҡасан да уҡытып ҡарамаған, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә эшләмәгән кешеләр яҙа кеүек тойола миңә...**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

**Быйылғы ҡоролоҡ һыу һәм һыуға мөнәсәбәтте ҡырҡа үҙгәртте, бугай. Һыуһыҙ ҡалған эреле-ваҡлы йылға-күл түгел, бәлки, ер аҫты һыуының да бөтә барыуы ысын мәғәнәһендә хәүеф менән янай икәнлеге асыҡланды.**

# ҺЫУҺЫҘ ЙӘШӘП БУЛМАЙ,

## әммә һыуҙың ҡәҙере юҡ

Тәбиғәттә һыу балансын һаҡлау, файҙаланыу хәстәрлектәрҙең һәм төрлө кимәлдә һөйләшеүҙәрҙең айырым тармағылыр. Билдәле, һыу өҫтөндә ултырған илдәр ҙә бөгөн эсәр һыуһыҙ интегә. Әле яңы ғына БСТ-ның "Сәләм"программаһында Гөлсирә Ғиззәтуллина, Голландияла эсәр һыуҙы шул тиклем һаҡсыл ҡулланалар, хатта һауыт-һабаны ла бер ҡат йыуғандан һуң тағы сайҡатыр өсөн һыу тотонмайҙар, ә таҫтамал менән һөртөп алалар, тигәйне.

Беҙҙең Башҡортостандың да күп төбәктәре эсәр һыуһыҙ яфалана. Күптән түгел республика Президенты Рөстәм Хәмитов беҙҙең төбәктә булғанында халыҡ менән осрашты, ҡайһы бер ауылдарҙың эсәр һыу юҡлығына зарланғанын үҙе ишетте.

Йәйгеһен ҡайһылыр райондың бер ауылы халҡы ҡоҙоҡ-скважиналарҙа һыу бөтөү сәбәпле зыяраттан аҡҡан шишмә һыуын эскән, тип ишеттек. Ул һыу таҙамы? Әллә 1920 йылдарҙа төбәгебеҙҙә ваба афәтен кисергәндәр ҙә күмелгән зыярат һаман шул вирустарҙы һаҡлаймы?

Илебеҙҙә дүрт йүнәлештә өҫтөнлөклө үҫеш программаһы, шул иҫәптән һаулыҡ һаҡлау программаһы тормошҡа ашырыла. Һаулыҡ һаҡлау өсөн яңынан-яңы дауаханалар, бүлектәр асыла. Уларға заманса өр-яңы, үтә лә ҡиммәтле ҡорамалдар һатып алына. Һүҙ юҡ - ҡыуаныс. Әммә һаулыҡтың нигеҙе - биологик таҙа һыу һәм аҙыҡ икәнен онотмайыҡ. Улар булмаһа, анауындай миллиондар түгеп һатып алынған яңы ҡорамалдарҙың һуҡыр бер тинлек файҙаһы ла юҡ.

Шуның өсөн әлеге Һаулыҡ һаҡлау буйынса өҫтөнлөклө милли программаға, тим, халыҡты таҙа эсәр һыу менән тәьмин итеү ҙә индерелһен ине.

Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов һыуҙы һаҡсыл файҙаланыуға ҡағылған ҡарар ҡабул итте. Бик тә кәрәк был документ. Документы булғас, уның матди базаһы ла буласаҡ бит инде. Бына, мәҫәлән, беҙҙең ауылыбыҙҙа һыу бынан 40 йыл элек үткәрелгәйне, ул торбалар күптән серене, тишелеп бөттө. Система бер генә тапҡыр ҙа таҙартылманы. Яңы һыу үткәргескә проект бар, тип бер нисә йыл әйтә киләләр килеүгә. Район хакимиәтенең йыллыҡ отчет йыйылышында ла, ул эш быйыл башҡарыла, тип ҡыуандырҙылар. Әммә эш атҡарылғаны юҡ әле.

Сент-Экзюпери "Һин йәшәү өсөн үтә кәрәк кенә түгел, һин үҙең йәшәү" тигән һыуға баһа биреп. Ошо ябай һүҙҙәрҙә йәшәйештең, йәшәүҙең бөтөн мәғәнәһе туплан-ған.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ,**
**Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылы.**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Мәсетле районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу барыуы тураһында тағы ла бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

➔ Әлбиттә, гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Уларға **микротулҡынлы мейес, кеҫә телефоны, сепаратор, электр сәйнүге, үтек** һәм башҡа төрлө матур бүләктәр отторасаҡбыҙ. Квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 300 кеше "Дини календарь" алып ҡыуанасаҡ.

➔ Әйткәндәй, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

➔ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атаәсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**50665** индекслы **"Киске Өфө"** алты айға **330 һум 24 тин, 50673** индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - **360 һум 24 тин** тора.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов республикаға эш сәфәре менән килгән "Газпром" идараһы рәйесе Алексей Миллер менән осрашты. Осрашыуҙа һүҙ республикала газ транспортын һәм төбәктә "Газпром"дың социаль сәйәсәтен үҫтереү мәсьәләләре тураһында барҙы. А.Миллер белдереүенсә, Башҡортостанда газ үткәреү эштәрен финанслау арттырыласаҡ. "Газпром"-дың социаль сәйәсәтенә килгәндә, "Газпром - балаларға"программаһы сиктәрендә яңы спорт ҡоролмалары төҙөү дауам итәсәк.

✔ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәтенә Ауырғазы районындағы һыу бүлгестә һәм Әбйәлил, Өфө райондарындағы һуғарыу системаларында төҙөлөш эштәрен ҡыҫҡа ваҡытта тамамларға, шулай уҡ Шишмә һәм Стәрлетамаҡ райондарында һуғарыу системалары төҙөү мәсьәләләрен хәл итергә ҡушты. Был объекттар муниципалитеттар өсөн мөһим әһәмиәткә эйә. Мәҫәлән, Ауырғазыла һыу бүлгесте сафҡа индереү 17 ауыл халҡын эсәр һыу менән өҙлөкһөҙ тәьмин итеү мөмкинлеген бирәсәк.

✔ Конкурс һөҙөмтәләре буйынса контракт нигеҙендә Ғафури районы хакимиәте башлығы итеп ҡасандыр райондың "Егән" колхозы рәйесе, унан һуң КПСС-тың Ғафури район комитетының икенсе секретары, "Каучук" ябыҡ акционерҙар йәмғиәтендә генераль директор урынбаҫары, 2008 йылдан Стәрлетамаҡтағы "Жилкомплекс" идарасы компанияһы директоры булып эшләгән Рәмил Бохаров тәғәйенләнде.

✔ 2011 йылдан алып республикала минималь эш хаҡы 5500 һумға етәсәк. Бынан тыш, 1 июндән ил буйынса бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы 6,5 процентҡа артасаҡ. 2011 йылдан башлап өс йыл дауамында республика бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы кимәлен йыл һайын 15 процентҡа арттырыу күҙаллана.

✔ Республиканың ҡала һәм райондарында "Йәш ғаилә - 2010" республика конкурсының беренсе этабы тамамланды. Билдәләнеүенсә, финалға сығыусыларҙы жюри ғаилә тормошон, мауығыуҙарын, ижади эҙләнеүҙәрен сағылдырған фото һәм видеоматериалдар ярҙамында билдәләйәсәк. Еңеүселәр декабрҙең беренсе яртыһында билдәле буласаҡ.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ҠУРСАҠҠА ӘЙЛӘНЕҮҘӘН ҠУРҠ...

## йәки "Марионетка"ларҙан һаҡ булайыҡ

**Йәмәғәт, үткән аҙнала Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында "Марионетка" балетын ҡараным әле. Композитор Игорь Стравинскийҙың "Петрушка" балеты музыкаһын файҙаланып, балетмейстер Ринат Әбүшахманов ике актлы яңы спектакль ижад иткән икән. Тәү ҡарашҡа Мөхәббәт һәм Нәфрәт, Хыянат һәм Тоғролоҡ хаҡында һүҙ бара һымаҡ унда. Тик ҡурсаҡтарҙың тойғо-хистәре, кисерештәре буламы һуң? Улар бит үҙҙәре генә бер аҙым да атлай, бармаҡ осон да ҡыбырлата алмай. Барыһы ла ҡурсаҡ уйнатыусының (балетта ул кеше Фокуссы тип атала) ихтыярында. Һәм ҡулдарында. Ул ҡурсаҡтарҙың тулы хоҡуҡлы хужаһы. Аллаһы тиергә лә мөмкин. Теләһә, нафталин һибеп, һандыҡ төбөнә һалып ҡуя. Теләһә, сәхнәгә, софиттар балҡышына, тамашасы алҡышына сығара. Ә, теләһә, утҡа һала. Юҡ итә, тимәк. Улар бит ҡурсаҡ ҡына. Сепрәк һәм сыбыҡ. Йәл түгел. Яңыларын эшләргә була. Матурыраҡтарын. Сағыуыраҡтарын. Фокуссы ҡурсаҡтар менән уйнап оҫтарған. Уның ҡулдары, бармаҡтары күренмәҫептәр аша ҡурсаҡтар менән шул тиклем еңел идара итә - залдағы тамашасы ҡурсаҡтар үҙ аллы йөрөй, бейей, йырлай, һөйләшә, хатта ғашиҡ була, нәфрәтләнә, ҡайғыра, шатлана икән, тип уйлауы ихтимал. Бына шундай ғибрәтле бер тамаша күреп ҡайттым әле.**

Тормошта ла бит йыш ҡына шулай - кеше ғүмер буйына үҙе уйлай, үҙ аллы йәшәй, ғүмер ҡора, үҙенең яҙмышын үҙе хәл итә, тигән фекерҙә. Асылда иһә күптән инде уның өсөн уйлап, хәл итеп, нығытып ҡуйғандар. Ул бары тик ҡурсаҡ уйнатыусының бармаҡтарына бәйләнгән ептәрҙә эленеп торған төҫлө сепрәк кенә. Бөгөн ул Арлекино. Иртәгә - Петрушка. Иртәнән һуңға...

1970-се йылдарҙа Советтар Союзында ғүмерҙә ишетелмәгән йырҙар йырлаған, халыҡ күнеккәнсә түгел, ә яңыса яңғыраған музыкаль төркөм барлыҡҡа килде. "Ваҡыт машинаһы" тигән исем йөрөттө ул. Был рок-төркөмөнөң "Ленин. Партия. Комсомол" тигән йырҙары булманы. "Усаҡ", "Карап", "Дингеҙҙәгеләр өсөн" тигән йырҙары менән бер рәттән улар "Марионеткалар" тип аталған йырҙы ла йыш ҡына башҡарҙы. "Буяғы юйыҡ, йөҙө тоноҡ, әллә ҡурсаҡ, әллә ҡурҡаҡ" тигәнерәк һүҙҙәр менән башлана ине ул. Ә беҙҙең өсөн, совет кешеләре өсөн тимәксемен, ул ваҡытта "марионетка" һүҙе бары тик Америка Ҡушма Штаттары менән ялғап, уның ҡуштандары хаҡында әйтелә ине. Баҡтиһәң, "Ваҡыт машинаһы" беҙҙең хаҡта, совет халҡы тураһында йырлаған булған икән. Һуңынан аңлашылды - беҙ тегендә, үткәндәрҙә, Советтар Союзында барыбыҙ ҙа ҡурсаҡ ҡына булғанбыҙ. Коммунистар партияһы төрлө "ептәр" ярҙамында миллионлаған халыҡ менән идара иткән. Бер "еп"те тартаһа, халыҡ һөрләгөшөп, ҡыуанышып сираттағы "быуат төҙөлөшө"нә юллана. Икенсе "еп" тартылһа иһә, бар кеше коммунизмға табан атлай. Партия юҡҡа сыҡҡас, халыҡ та ҡурсаҡ булыуҙан туҡтағандыр, тимәксеһегеҙме? Ай-һай!

Ҡурсаҡтар һәм ҡурсаҡ уйнатыусылар һәр ваҡыт булған һәм улар бөгөн дә беҙҙең арабыҙҙа. Беҙ ҡурсаҡтарҙы күреп торабыҙ, уларҙың исем-шәрифтәрен, билгән урындарын беләбеҙ. Улар ябай кеше һымаҡтар. Башҡа кешеләр кеүек үк һөйләшә, атлап йөрөй. Өйләнә, кейәүгә сыға, балалар үҫтерә. Алдарына ниндәйҙер маҡсаттар ҡуя. Тәү ҡарашҡа ғына шулай ул. Асылда уларҙың хәрәкәттәренә, улар әйткән һүҙҙәргә иғтибар итһәң, уларҙың ҡурсаҡ булыуҙары шунда уҡ күренә. Тирә-яғығыҙға ҡараштырығыҙ, эргәгеҙҙәге кешеләрҙе абайлағыҙ әле - ҡурсаҡ түгелдәрме? Һөйләгән һүҙҙәре үҙҙәренекеме? Фекерҙәре үҙ баштарында тыуғанмы? Әллә уларҙы кемдер уйнатамы? Уларҙың баштарына үҙ фекерҙәрен, телдәренә үҙенең һүҙҙәрен һаламы? Был нимә хаҡында әйтмәксе, тиһегеҙме? Хәҙер аңлатырға маташасаҡмын.

"Оппозиция" тигән ғәләмәт булғайны республикабыҙҙа. Ике ҡулдың бармаҡтарына ғына һалып һанарлыҡ ине уларҙың иҫәбе. Ун-ун бишләп кеше. Эй, ҡаңғырҙылар улар, эй шаулаштылар. Бер-бер хәл була ҡалһа, тауыш күтәргән булдылар, урамға сыға һалдылар, пикет-микет ойоштorҙолар, донъя(!) йәмәғәтселегенә мөрәжәғәт итә инеләр. Гәзиттәре лә булды уларҙың (гәзит тип әйтһәң, башҡа баҫмалар үпкәләр), интернетта ла сайттар астылар. "Ҡыйырһытылғандар һәм кәмһетелгәндәр" ине улар. Үҙҙәрен революционерҙар һымаҡ тота инеләр. Ленин үҙенең "Искра"һын Швейцарияла баҫтырып Рәсәйгә индергән кеүек, былар ҙа гәзиттәрен Силәбе өлкәһендәме, Пермь крайындамы баҫтырған булып, Башҡортостанға индергән булып, йәшерен рәүештә таратҡан булып хитландылар. "Идея өсөн" көрәшәләр ине улар. Һәр хәлдә улар үҙҙәре мөйөш һайын шулайтып ҡысҡырҙы. Ниндәй идея булғандыр инде уларҙың баштарында? Һаман аңлашылмай. Кеше һымаҡтар ине улар ҡарап тороуға. Бөгөн аңлашыла - ҡурсаҡ ҡына булғандар икән. Ҡыланыштары тәбиғи түгел ине шул. Берәүһе үҙен эшҡыуар тип атап йөрөнө. Был уның "сәхнә"лә башҡарған роле генә булған икән. Икенсеһенең роле "депутат". Асылда иһә (был үткән аҙнала асыҡ күренде) - ул теләһә ниндәй юл менән аҡса һуғырға маташыусы эшҡыуар булып сыҡты. Тағы ла берәүҙәре үҙен "ғалим" тип атай. Теләһә ниндәй түгел, йәмәғәт. Милли өлкәләге. Баҡтиһәң, уны бөтә донъяла беләләр, уның ғилми эштәрен юғары баһалайҙар. Асылы - ҡоҡкосо. Йәки ҡоторҡҡос. Поп Гапон, тимәк. Тағы ла бер нисәһен атарға булыр ине. Тик улары ситуацияға ҡарап теләһә ниндәй сүрәткә инеүҙәре ихтимал. Улар бөгөн "милләтсе". Иртәгә "демократ". Кәрәк булһа, "коммунист", кәрәкмәһә - "либерал". Бөгөн торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа ҡаршы сығырға кәрәк булһа, улар әҙер. Ҡулдарында плакаттар. Иртәгә Путин менән Медведевты тәнҡитләргә кәрәкме? Ҡыҙыл әләмдәрҙе күтәрә улар. Һуңғы ике-өс йыл улар республиканы "тапаны". Кәрәктәре бөткәс, ҡурсаҡ уйнатыусы уларҙы һандыҡҡа һалып ҡуйғайны. Бөгөн улар ҡабат баштарын күтәрә башланы. Яңы роль уйнар өсөн микән?

Күрәм - берәһе интервью бирә. Уныһы бөтә гәзиттәрҙә тиерлек донъя күрә. Ҡарайым - икенсеһе телевизор аша сығыш яһай. Республиканың, уның халыҡтарының киләсәген ҡайғыртҡандары хаҡында һөйләй. Төкөрөк сәсә. Ышанып була микән уларға? Кеше ҡулындағы ҡурсаҡтарға?

Ә уларҙы кем уйната һуң, тигән һорау тыуыр, моғайын. Кем һаман "сәхнә" артында ҡала? Кем үҙенең уй-фекерҙәрен "ҡурсаҡ"тарҙың башына һала? Уларҙы "еп"тәргә теҙеп, уңлы-һуллы тартҡылай? Ҡурсаҡтарға йән "өрә"? Был һорауға кем яуап бирер икән?

Ҡурсаҡ уйнатыусы, ғәҙәттә, үҙенең йөҙөн күрһәтмәй. Ҡурсаҡтарға тәғәйен алҡыштарҙан (йәки ҡарғыштарҙан) үҙенекен ала һәм шуның менән ҡәнәғәт. Ул бит хатта ҡара бирсәткә кейә, улар күренеп тормаһын өсөн. Күрәһең, ҡулдарындағы бысраҡ күренеп тормаһын өсөндәр.

Ғөмүмән, йәмәғәт, беҙ кемдең ҡулында? Беҙҙең менән кем идара итә? Беҙҙең, балаларыбыҙҙың яҙмышын кем хәл итә? Үҙебеҙгә үҙебеҙ хужамы? Кемдендер ҡулындағы ҡурсаҡ түгелбеҙме? Ошо һорауҙарға яуап эҙләп ҡарағанығыҙ бармы?

**Таһир ИШКИНИН.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ҠОШ ИТЕН...

## туңдырмай һатасаҡтар

**Яңы йылдан алып Рәсәйҙә туңдырылған тауыҡ ите һатыу тыйыласаҡ. Был тыйыу илебеҙҙә етештерелгән һәм сит илдән килтерелгән тауыҡ итенә лә, шул уҡ ваҡытта уны эшкәртеүҙә файҙаланыуға ла ҡағыла. Роспотребнадзор башлығы Геннадий Онищенко белдереүенсә, 2011 йылдың 1 ғинуарынан сауҙа кәштәләрендә фәҡәт һыуытылған ҡош ите генә ҡалырға тейеш. Онищенко әйтеүенсә, бындай ҡарарға килеү хаҡында 2008 йылда уҡ хәбәр ителгәйне инде.**

- Ватан етештереүселәре быға әҙер, - тип раҫлай Роспотребнадзор етәксеһе. Баш санитар врачтың һүҙҙәренә ҡарағанда, был яңылыҡ ҡулланыусылар хаҡында хәстәрлек күреү менән аңлатыла. Һыуытылған иттә уның файҙалы матдәләре һаҡланып ҡала, ә минус 20 градусҡа туңдырыу, аҙаҡ бешергән саҡта тағы иретеү уның аҙыҡ ҡиммәтен кәметә. Әйткәндәй, технологияларҙың бөгөнгө үҫеш кимәле магазиндарҙы һыуытылған файҙалыраҡ продукт менән өҙлөкһөҙ тәьмин итә ала.

Эксперттар фекеренсә, яңы тыйыу ватан етештереүселәренә ярҙам сәйәсәтенә бермә-бер тап килә. Шул уҡ ваҡытта был тәү сиратта ҡош итен импортлаусылар кеҫәһенә һуғасаҡ: алыҫ араларға туңдырылған тауыҡ боттары ташыу ҡыйыныраҡҡа ла, ҡиммәткә лә төшәсәк.

Шулай ҙа ҡайһы бер һорауҙар асыҡ килеш ҡала әле. Мәҫәлән, ҡош фабрикалары булмаған алыҫ төбәктәр менән ни булыр? Унда ла Үҙәк Рәсәйҙән һыуытылған ҡош ите ташыу ҡыйын һәм ҡиммәт буласаҡ бит...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓22 ноябрҙә "Оҫта ҡулдар-2010" республика конкурсы сиктәрендә һуғыу һәм бәйләү буйынса мастер-класс үткәреләсәк. Уны Әбйәлил районының бәйләү буйынса оҫтаһы Рәсилә Вәлиева үткәрә.

✓Башҡортостан Федераль бюджеттан ауыл юлдары төҙөүгә 3-4 млрд һум аҡса алыуға иҫәп тота, тип белдерҙе БР Президенты Хөкүмәт ултырышында. Билдәләнеүенсә, ауыл юлдарын иҫке технологиялар менән төҙөү маҡсатҡа ярашлы түгел. Ә яңы технологиялар ҡулланып, сыҙамлы, сифатлы материалдар ҡулланырға кәрәк. Президент миҫал итеп Нижегородка өлкәһе тәжрибәһен килтерҙе. Ундағы традицион булмаған ысул менән төҙөлгән юлдар 20 тонна көсөргәнеште күтәрә һәм хеҙмәт итеү срогы 8 йылға барып етә.

✓З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте өс һүҙлек баҫып сығарҙы. Улар - Вәкил Хажиндың "Башҡорт-рус һәм рус-башҡорт кеҫә һүҙлеге", Дәүләткирәй Мәһәҙиевтың "Ислам дине" белешмә һүҙлеге һәм Луиза Сәмситова төҙөгән лингвокульторологик һүҙлек. Ислам дине буйынса белешмә башҡорт телендә тәүге тапҡыр нәшер ителә һәм унда Ҡөрьән сүрәләре, аяттары, бәйғәмбәрҙәр тураһында мәғлүмәттәр бирелә.

✓БР Президенты футболды республиканың физик культура һәм спорт донъяһында өҫтөнлөклө йүнәлеш тип билдәләне. Яңыраҡ Башҡортостан Республикаһы футбол һәм минифутбол федерацияһының отчет-һайлау йыйылышы үтте. Хәҙер федерацияны Шамил Ғәзизов етәкләйәсәк. Ойошма алдына ҡуйылған маҡсат - республикала футболды үҫтереү. Быны тормошҡа ашырыу өсөн беренсе сиратта Өфөлә 30-35 мең тамашасыны һыйҙырырлыҡ замансa стадион төҙөү кәрәк. Комиссия билдәләүенсә, буласаҡ стадион урыны Салауат Юлаев һәйкәле янында булыуы мөмкин. Әле эшләп килгән "Нефтселәр", "Гастелло", "Төҙөүселәр" стадиондары реконструкцияланасаҡ.

✓Белорет йүгереүсеһе Лилиә Шобухованы Европа еңел атлетика федерациялары ассоциацияһы октябрҙең иң яҡшы спортсыһы тип билдәләне. Был турала ассоциацияның рәсми сайты хәбәр итә. Ул Чикаголағы марафонда еңде һәм унда Рәсәй рекордын ҡуйҙы - 2:20.25. Донъяла был миҙгелдәге иң яҡшы һөҙөмтә был.

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...

# СӘЛӘМӘТЛЕККӘ... ҡул һелтәмәйек

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала Республика Советының һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләренә арналған ултырышы булып үтте. Унда Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. Бөгөн республиканың һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә ниндәй мәсьәләләргә төп иғтибар йүнәлтелергә тейеш?**

## Күрһәткестәр

Белдерелеүенсә, республикала сабыйҙар үлеме, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары һаны кәмегән. Ғүмер оҙайлығы 1,5 процентҡа артып, 69 йәш тәшкил итә, ләкин ир-ат нигеҙҙә 60 йәш кенә йәшәй. Былтыр күп йылдар эсендә беренсе тапҡыр тыуым үлемдән күберәк булған. Шул уҡ ваҡытта яман шеш менән сирләүселәр һаны арта, мәктәп тамамлаусыларҙың 20 процентының ғына һаулығы яҡшы. Быға, бәлки, дарыуҙарҙың хаҡы юғары булыуы, теркәлеүең булмаһа, медицина ярҙамы ала алмау, поликлиникаларҙағы оҙон сираттар ҙа йоғонто яһайҙыр.

## Кадрҙар, эш хаҡы

Бөгөн республиканың һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә 90 мең кеше эшләй. Медуниверситет һәм медколледж йыл һайын 2400-ҙән ашыу белгес әҙерләп сығарһа ла, медиктар етешмәй. БР Һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Георгий Шебаев әйтеүенсә, бөгөнгә дәүләт һәм муниципаль медицина учреждениеларында 10 мең кешегә 31,6 табип, 92,9 урта медицина персоналы тура килә. Бигерәк тә ауыл ерҙәрендә айырым белгестәр етешмәй. Мәҫәлән, Йәрмәкәй районында - офтальмолог, Йылайыр һәм Салауат районында - ЛОР, республиканың 12 районында кардиолог штаты ҡаралмаған. Балаҡатай, Иглин, Ҡалтасы, Мишкә райондарында белгестәр булмау сәбәпле был ставкалар буш тора. "Сығарылыш студенттары, хатта вузға маҡсатлы йүнәлтмә менән ингән осраҡта ла, бәләкәй ҡалаларға, ауылдарға ҡайтҡылары килмәй, - тип белдерҙе Президент. - Бында стимуллаусы саралар - торлаҡ, өҫтәмә түләүҙәр үҙ ролен уйнарға тейеш". Бөгөн Башҡортостан медиктарының уртаса эш хаҡы 11 мең һум тәшкил итә.

## Медицина округтары тураһында

Һаулыҡ һаҡлау учреждениеларының төп фондтарына тулы инвентаризация үткәреү Башҡортостан дауаханаларының һәм поликлиникаларының яртыһынан күберәгенең иҫке булыуын асыҡлаған. Күптәре санитар нормаларға тура килмәй, уларға кәрәкле ҡорамалдар ҙа урынлаштырып булмай. Шуға күрә Башҡортостандың муниципаль-ара медицина үҙәктәре базаһы нигеҙендә 9 медицина округы ойоштороу тәҡдим ителә. Уларға яҡын-тирәләге райондар халҡы беркетеләсәк. Бының өсөн ике йыл һуҙымында ике - төбәк, 9 беренсел ҡан тамырҙары үҙәге һәм бүлексәһе, 9 травматология, 16 онкология, 9 перинаталь үҙәк ойошторолоп, кадрҙар, ҡорамалдар менән тәьмин ителергә тейеш. Бынан тыш, алдағы ике йылда төбәктә 100 фельдшер-акушер пунктында капиталь ремонт яһаласаҡ, дөйөм табип практикаһының 30 офисы ойоштороласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Медицина өлкәһен ҙур үҙгәрештәр көтә. Заман менән бергә атлайым тиһәң, бындай үҙгәрештәр кәрәктер. Әммә бөгөн район үҙәгендәге дауаханаға барырға мөмкинлек таба алмаған, барған хәлдә лә оҙон сираттың үткәнен көтөп, бер белгескә инергә икешәр көн йөрөгән халыҡ үҙ сәләмәтлегенә ҡул һелтәп ҡуйып, медицина күрһәткестәре бөтөнләй кирегә тәгәрәмәҫме? Миҙал бит ике яҡлы...**

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА әҙерләне.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТӨҘӘТЕҮГӘ ҠАРАҒАНДА... боҙмау яҡшыраҡ

**Был тормошта беҙҙең һаҡсыларыбыҙ бик күп, шөкөр, тийәйек шуға: табиптар һаулығыбыҙҙы һаҡлай, милиционерҙар хәүефһеҙлек, тәртип һағында тора, һалдаттарыбыҙ Ватаныбыҙҙы күҙ ҡараһынан ысҡындырмай... Эйе, кәрәге булмаған әйберҙе һаҡламайҙар. Был ерҙә йәшәгән һәр кешенең ғүмере ҡәҙерле. Кешегә кәрәк булған һәр әйбер шулай уҡ ҡәҙерле һәм уларына ла һаҡсы кәрәк. Кемдер тарафынан нимәлер һаҡлана икән, тимәк, ул әйберҙең ҡәҙере бар. Мәҫәлән, йәмғиәтебеҙҙә тәртип һаҡлауға зарурлыҡ бик ҙур. Сөнки тәртипкә күп нәмә бәйле: кеше ғүмере лә, уның тормоштағы уңайлыҡтары ла, тыныслығы ла, хәүефһеҙлеге лә...**

- Тәртип һаҡлау бик күп көс талап итә беҙҙән, - тип белдерҙе Өфөнөң Эске эштәр идаралығы начальнигы Илгиз Садиҡов журналистар менән осрашыуҙа. - Был бурысты үтәгәндә төп ҡағиҙә: енәйәттең үҙе менән генә түгел, уны тыуҙырыусы сәбәптәр менән көрәшеү, бар тәртип боҙоуҙарҙы алдан иҫкәртергә тырышыу. Был енәйәтселектең ҡырҡа кәмеүенә лә, кеше ғүмерен һәм кешегә ҡәҙерле бөтөн әйберҙәрҙе, хәүефһеҙлекте һаҡлауға ла булышлыҡ итә.

Өфө милицияһы был бурысты еренә еткереп үтәргә тырыша икәне сағыштырыуҙарҙа күренә: былтырғы менән сағыштырғанда Өфө ҡалаһында ҡылынған енәйәттәр һаны 5,5 процентҡа кәмегән. Шулай уҡ йәмәғәт урындарында ҡылынған тәртипһеҙлектәрҙең - 716, урамдарҙағының 240 осраҡҡа, бәлиғ булмағандар тарафынан башҡарылған енәйәттәрҙең 30 процентҡа кәмеүе - тап эске эштәр органдары тарафынан даими үткәрелә килгән иҫкәртеү саралары һөҙөмтәһе булыуы тураһында ла әйтелде. Урамдарҙағы кеҫә бурҙары, автотранспорт эсендәге әйберҙәргә "айыу майы һөртөүселәр", фатирҙарҙы "таҙартыусылар" һәм кеше талаусылар кәмегән. Әммә наркотик матдәләр таратыусылар, уларҙы ҡулланыусылар артҡан. Был юҫыҡтағы енәйәттәрҙе бөтөрөү - бөгөнгө көндә иң ҡырҡыу мәсьәлә, тип белдерҙе И.Садиҡов. Ул тағы ла мәктәптәрҙә тестар үткәреү, йәмәғәт урындарында, юлдарҙа видеокамералар урынлаштырыу, махсус төркөмдәрҙең балалар һәм үҫмерҙәр менән әүҙем эшләүе енәйәттәрҙе кисектерә торған төп саралар булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

-Енәйәтселек кәмей бара, тинегеҙ, уның сәбәптәре анализланғанмы? - тигән һорауға Эске эштәр идаралығы начальнигы урынбаҫары - штаб начальнигы Рифҡәт Саяхов былай тип яуапланы:

- Ҡала халҡының матди хәле тотороҡлана бара, был эскелектең кәмеүенә лә булышлыҡ итә. Сөнки кеше бит сараһыҙҙан, эшһеҙлектән, ауыр хәлгә ҡалғанда эскелеккә бирелеүсән. Эскелектең кәмеүе, әлбиттә, туранан-тура енәйәтселектең кәмеүенә килтерә.

Осрашыуҙа шулай уҡ хоҡуҡ һаҡлау органдарындағы ҡыҫҡартыуҙар тураһында ла һүҙ булды. И.Садиҡов әйтеүенсә, милицияла иң яҡшы әҙерлекле, физик яҡтан иң һау-сәләмәт хеҙмәткәрҙәр генә ҡалдырыласаҡ. 2012 йылда милиция сафын 22 процентҡа тиклем ҡыҫҡартыу ҡаралған. Әммә, Илгиз Камил улы әйтеүенсә, был үҙгәрештәр милиция хеҙмәткәрҙәренә әллә ни ауырлыҡ килтермәйәсәк.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Һүҙ башында юҡҡа ғына табиптарҙы телгә алманыҡ. Ауырыуҙы булдырмау өсөн саралар күрелеүе табип өсөн дә, пациент өсөн дә отошло. Һау булыр өсөн кешенең үҙендә лә ҙур теләк булыуы мотлаҡ. Ауырыуҙы аҙҙырып, хирург бысағын эшкә ҡушыуға ҡарағанда унан ваҡытында һаҡланыу саралары эҙләүең хәйерлерәк бит. Һаулыҡ һаҡлаусыларҙың да, хоҡуҡ һаҡлаусыларҙың да иғтибар үҙәгендә кеше булыуын иҫәпкә алғанда, был ике структура араһында параллель үткәрергә була. Ҡырҡып ташланған ауырыу ағзаны ла, енәйәтсенең төрмәлә уҙғарылған ғүмерен дә кире ҡайтарып булмай. Нимәнелер һуңлап ҡына, эш үткәс төҙәтеүгә ҡарағанда, уны боҙмауың яҡшыраҡ бит. Яҙмыштар әрәм-шәрәм ителмәҫ элек, бишектән үк бала күңеленә изгелек орлоҡтары ла, һаҡсыллыҡ орлоҡтары ла һалыу фарыз. Ул саҡта хоҡуҡ һаҡлаусыларға ла, табиптарға ла эш еңелләшәсәк.**

**Байым РӘХИМЙӘНОВ.**

ШАҢДАУ



# ПАТЕНТ ЯРҘАМЫНДА ЯҠЛАЙЫҠ!

**Сыға башлауының һигеҙ йыллығын билдәләгән "Киске Өфө" бик күптәрҙең тоғро рухи юлдашына әүерелде. Сөнки баҫмала республикабыҙ һәм айырыуса милләтебеҙ йөҙөн билдәләгән бинаһая мәсьәләләр күтәрелә.**

Мәҫәлән, Әхмәр Үтәбайҙың башҡорт балы һәм башҡорт ҡымыҙы тураһында яңыраҡ ойошторған һөйләшеүен мин тарихта ҡалырлыҡ материал, тип һанайым. Тарихта ҡалырлыҡ, сөнки унда бал менән ҡымыҙҙың, заман талап иткәнсә, патентлы булыу-булмауы хаҡында ла төплө һүҙҙәр әйтелде. Шуларҙы дауам итеп, гербыбыҙҙа урын алған ҡурайыбыҙҙың патенты бармы-юҡмы икәнен белге килә. Ҡумыҙыбыҙ ҙа, бигерәк тә ағастан яһалғаны - шулай уҡ донъяла ҡабатланмаҫ күренеш. Башҡорт дәүләт филармонияһында үткәрелгән ҡурай байрамына Рөстәм Хәмитовтың килеүе тураһында яҙҙығыҙ. Бик хуп. Тимәк, республика Президенты милли уйын ҡоралыбыҙҙы ярата һәр хөрмәт итә. Ә ҡурайыбыҙ рәсми кимәлдә башҡорттоҡо тип танылғанмы һуң? Был хаҡта мәғлүмәт юҡ. Роберт Юлдашевтың яңыраҡ Магнитогорскиҙа шаулап-гөрләп үткән концертында ла был хаҡта бер һүҙ ҙә әйтелмәне. Донъяла танылыу алған ҡурайыбыҙ тип ғорурланабыҙ ҙа ул...

Минеңсә, башҡорт алфавиты ла рәсми теркәлергә тейеш. Ә һәр кешенең телендә булған һәм Президентыбыҙ Рөстәм Хәмитов тарафынан яҡланған Торатауға бөгөндән үк Федераль кимәлдә тәбиғәт ҡомартҡыһы тигән исем бирелергә тейеш. Әйткәндәй, бындай яҡлауға Ирәмәл дә, Ирәндек тә, Асылыкүл дә, Мауыҙҙы ла, Шүлгән һәм башҡа тәбиғәт ҡомартҡыларыбыҙ ҙа мохтаж. Халҡыбыҙ гимны булған "Урал" да, үҙәктәрҙе өҙгән "Зөлхизә" лә, сәхнәбеҙ түренән төшмәгән "Байыҡ" та...

**Самат ФӘЙЗУЛЛИН.**
**Әбйәлил районы.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2-3 декабрҙә Өфөлә "Ер-милек мөнәсәбәттәрен үҫтереү һәм камиллаштырыуҙың төбәк проблемалары" тигән төбәк-ара ғилми конференция үтәсәк

✓18-20 ноябрҙә Ҡала мәҙәниәт һарайында "Үҙгәрештәр еле - 2010" Халыҡ-ара заманса һәм хореография фестивале үтә. Уны БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы ойоштора. Заманса хореография сәнғәтен пропагандалау һәм үҫтереү, йәштәрҙә зауыҡ тәрбиәләү, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау маҡсаты менән уҙғарылған фестивалдә бик күп төбәктәрҙән 40-лап коллектив ҡатнаша.

✓22-27 ноябрҙә Өфө поликлиникаларының береһендә "Остеопороз. Үҙеңдең сиреңде бөгөн бел" тигән Бөтә Рәсәй социаль программа сиктәрендә түләүһеҙ диагностика пункты эшләйәсәк. Тулыраҡ мәғлүмәтте 8-800-200-02-04 телефоны буйынса алырға мөмкин. Өфөләләр диагностика пунктында был сирҙе нисек иҫкәртеү тураһында белгес кәңәштәре ала, шунда уҡ үҙ һөйәктәренең ныҡлығын тикшертә аласаҡ.

✓Өфөнөң "Тиҙ ярҙам" станцияһы үҙ эшенә тағы бер яңылыҡ индерә. Тиҙҙән ишетеү һәләте буйынса инвалидтарҙан СМС-хәбәр аша саҡырыу ҡабул ителәсәк. Станцияның баш табибы Марат Йыһаншин белдереүенсә, шылтыратып заявка бирергә һәләтһеҙ граждандар өсөн ошо маҡсатта айырым исемлек төҙөлә.

✓БР Милли музейенда XIX һәм XX быуаттарҙағы әйберҙәр коллекцияһынан "Ваҡыт һәм әйберҙәр" күргәҙмәһе асылды. Тамашасылар бынан йөҙ йыл элек йәшәгән кешеләрҙең көндәлек тормошон һүрәтләгән экспонаттар менән таныша аласаҡ.

✓Екатеринбург, Силәбе һәм Өфө йүнәлешендәге юл Рәсәйҙәге иң хәүефле юлдар иҫәбенә инә. Был хаҡта Төбәк-ара йәмәғәт үҙәге хәбәр иткән.

✓Рәсәй тимер юлдары 2011 йылдың 1 ғинуарынан мәктәп уҡыусыларына алыҫ араға йөрөүсе поездарға билет хаҡтары өсөн 50 процент ташлама индерә.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Баш ҡалала "Ҡала мөхите" социаль реклама фестиваленең еңеүселәре билдәләнде һәм Гран-при "Балалар - беҙҙең киләсәк" балалар байрамы сценарийы өсөн "Уфанет" компанияһына тапшырылды. Быйыл алтынсы тапҡыр уҙғарылған сара "Фекерҙәреңде ҡысҡырып әйт!" тигән ижади девиз аҫтында үтте. Йылдағыса, фестиваль йәмғиәтебеҙҙә осраған социаль проблемаларға кешелектең иғтибарын йәлеп итергә, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләргә, битараф булмаҫҡа саҡырҙы.**

# БИТАРАФ БУЛМАҒАНДАР ЯРЫШЫ

Социаль реклама - коммерция булмаған рекламаның бер төрө һәм ул йәмәғәт тәртибе модулдәрен үҙгәртеүгә һәм социум проблемаларына иғтибар йәлеп итеүгә йүнәлтелә. Социаль продукттың бер тармағы булараҡ, ул башҡа төр рекламаларҙан айырылып тора. Советтар Союзы ваҡытында киң билдәлелек яулаған Дмитрий Моорҙың "Һин доброволец булып яҙылдыңмы?" һәм Ираклий Тоидзеның "Тыуған ил-әсә саҡыра!" плакаттарынан башланғыс алған социаль реклама Рәсәйҙә әлегә киң билдәлелек яулап өлгөрмәгән. Шуға ла социаль реклама тураһында һүҙ алып барғанда, һәр ваҡыт Көнбайышҡа йышыраҡ әйләнеп ҡарарға һәм улар миҫалында өйрәнергә тура килә. Был турала журналистар өсөн ойошторолған матбуғат конференцияһында Мәскәүҙән саҡырылған ҡунаҡтарҙың береһе, "SocialCraft" интернет-маркетинг агентлығын үҫтереү буйынса директор, "YANG!" креатив мәктәбе директоры, Юғары иҡтисад мәктәбендә "Реклама" һөнәре кураторы Сергей Долгов та белдергәйне:

-Рәсәйҙәге социаль реклама әлегә бәләкәй бала кеүек. Ул атларға, үҙенең фекерҙәрен әйтергә, һүрәт төшөрөргә, килеп тыуған проблемаларҙы хәл итергә өйрәнә генә әле. Ә Европалағы социаль реклама был юлды күптән үткән. Шулай ҙа һуңғы йылдарҙа был йәһәттән үҙгәрештәр байтаҡ. Күптәр социаль рекламаны ҡабул итергә өйрәнде. Хәҙер беҙҙең төп маҡсатыбыҙ шунда: йәмғиәтебеҙҙә социаль реклама ысынлап та кешеләрҙең тормошон ыңғай яҡҡа үҙгәртә ала, тигән фекергә ышандырыу.

Баш ҡалала үткәрелгән фестивалдә ҡатнашырға теләүселәрҙең йылдан-йыл арта барыуы ла был һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөн раҫлай. Быйыл 9 номинацияла 500-ҙән артыҡ эш тәҡдим ителгән. Уларҙың яртыһы профессиональ реклама йәмәғәтселектәре эшләнә, ижади проект менән сығыш яһаусы студенттар һаны ла күбәйгән. "Ҡала мөхите - 2010" фестивалендә Өфөнән тыш, Учалы, Стәрлетамаҡ, Салауат, Сибай, Күмертау, Рәсәй ҡалаларынан Владимир, Екатеринбург, Омск һәм Белорус республикаһынан Минск, Могилев, Светлогорск ҡалаларынан килгән эштәр менән танышырға мөмкинлек булды. Проекттарҙың күп булыуы һәм һайлап алыу мөмкинлеге фестивалдең сифатын күтәреүгә лә килтерә. Быйыл, мәҫәлән, ҡайһы бер номинацияларҙа жюри тарафынан еңеүселәр билдәләнмәүе ошоноң менән аңлатыла ла инде.

Был фестивалдең тағы бер үҙенсәлеге шунда: ул йыл һайын төрлө форматта үткәрелә. Быйыл гәзәти күргәҙмәләр һәм оҫталыҡ дәрестәренән тыш, төрлө ижади майҙансыҡтар ҙа әүҙем эшләне. Булат Йософовтың киномәктәбе тәҡдим иткән видеороликтар, Ҡала үҫеше йәмәғәт фонды, "Ораторлыҡ мәктәбе сәнғәте", "СТС" һәм "Мегафон" компанияларының социаль проекттары презентациялары һәм абруйлы ҡунаҡтар үткәргән оҫталыҡ дәрестәре тәжрибә һәм фекерҙәр менән уртаҡлашыу урынына әүерелде.

-Беҙ бөтәбеҙ ҙә бер ҡалала, бер илдә йәшәйбеҙ һәм шуға ла ғаиләбеҙ, яҡындарыбыҙ йәшәгән, белем алған, ял иткән был донъяға беҙ битараф булырға тейеш түгелбеҙ. Социаль реклама тигән төшөнсә, социаль реклама менән шөғөлләнеүселәр бар икән, тимәк, йәмғиәтебеҙ ҙә үҫешә, тигән һүҙ. Һуңғы йылдарҙа беҙ йәшәгән мөхит тә, ундағы кешеләр ҙә үҙгәрҙе, иң ҡыуаныслыһы, улар икенсе төрлөрәк фекер йөрөтә башланы. Был яңы мөхитте төҙөүҙә "Ҡала мөхите" фестивалендә ҡатнашыусыларҙың ярҙамы ҙур, - тигәйне ҡатнашыусыларҙы тәбриклӛп Өфө ҡала округы башлығы урынбаҫары Сынтимер Бәязитов. Шулай булғас, социаль реклама бөгөн үҙенең маҡсаттарына ирешә һәм йәмғиәтебеҙҙә сәләмәт йәшәү рәүешенә, донъяға айыҡ күҙҙәр менән бағырға булышлыҡ итә.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**



**ҺӘМ ТАҒЫ ЛА...**

**Фестивалдә башлыса йәштәр ҡатнашты. Уныһы ҡыуаныслы, тимәк, бөгөнгө замандың йәш кешеһе айыҡ, наркотиктарһыҙ йәшәү рәүешен дөрөҫ тип таба һәм тиҫтерҙәрен дә ошоға саҡыра. Тик улар араһында башҡорт йәштәренең аҙ булыуы ғына ҡәйефте ҡырҙы. Ә башҡорт тематикалы берҙән-бер проект - башҡорт телендә яҙылған футболкалар тәҡдим итеүсе егеттәр Заһир Ишкинин менән Артур Батыршин "Полиграфия" номинацияһында икенсе урынға лайыҡ булды. Был егеттәр беҙҙең гәзиттә баҫылған мәҡәлә аша уҡыусыларыбыҙға яҡшы таныш. Артур - беҙҙең хеҙмәттәшебеҙ, редакцияның инженер-программисы. Заһир - 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡытыусыһы. Фестивалдә тәүге тапҡыр ҡатнашалар. Һәм еңеү яуланылар. Афарин, егеттәр!**

ҺОРАУ-ЯУАП

## ЭШ ХАҠЫНАН ИҪӘПЛӘНМӘГӘН

**Декрет отпускыһында саҡта ҡыҙым йәнә икенсе бала тапты. Тәүге сабыйы өсөн 25 мең һум пособие алғайны, икенсеһенә күпкә әҙерәк тейҙе - 17 мең. Нилектән бындай айырма килеп сыҡты икән?**

Тәүге балаға, күрәһең, пособие уртаса айлыҡ эш хаҡынан иҫәпләп сығарылһа, икенсеһенә ваҡытлыса хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы буйынса түләнгәндер. Шунлыҡтан айырма килеп сыҡҡан да инде.

## УРЛАШҠАН ӨСӨН

**Магазинда шундай хәлдең шаһиты булырға тура килде: тауар өсөн аҡса түләмәй сығып барған берәүҙе тотоп алып, магазин хеҙмәткәрҙәре унан тауарҙың унлата хаҡын түләүҙе талап итте. Был дөрөҫмө?**

- Дөрөҫ түгел. Магазин хеҙмәткәрҙәре милиция саҡыртып, был кешегә тикшереү үткәрергә, административ протокол төҙөтөргә тейеш ине. Шунан һуңғына администрация комиссияһы ҡарар сығара ала.

## ҮҘ ӨЛӨШӨ БАР

**Апайым яңыраҡ тол ҡалды, улы хәҙер мираҫҡа дәғүә итә. Апайымдың инвалид ҡыҙы ла бар. Белеүебеҙсә, мираҫта ир йә ҡатындың мотлаҡ өлөшө була. Апайым нимәгә өмөт итә ала?**

РФ Граждандар һәм Ғаилә кодекстары нормаларына ярашлы, ысынлап та, мираҫ составында ир йәки ҡатын өлөшө бар. Никахта саҡта бергә тупланған бөтә милектең ҡап яртыһы - апайыҙыҙҙың өлөшө. Милектең ҡалған ярты, йәғни мәрхүмдең өлөшө, беренсе сираттағы мираҫсылар араһында (әгәр васыятта икенсе төрлө ҡаралмаған булһа) өс тигеҙ өлөшкә бүленә. Әлеге осраҡта тәүге сират мираҫсылары тип мәрхүмдең ҡатыны менән балалары иҫәпләнә.

## ЗАКОНҒА ТАЯНЫҒЫҘ

**Мин декрет отпускыһында булғанда урынымда ваҡытлыса икенсе бер ҡатын эшләгән. Начальник әйтеүенсә, хәҙер ул икенсе вазифа башҡара һәм беҙ уның менән ярышып эшләргә тейешбеҙ. Өс айҙан һуң начальник кемебеҙҙе эштә ҡалдырырға хәл итәсәк. Был законлы хәлме?**

Бындай саҡта иң тәүҙә бала табыу менән бәйле отпускыға киткәндең урынына килгән хеҙмәткәрҙең ҡыҫҡа сроклы хеҙмәт килешеүе буйынса эшләүен иҫтә тотоу мотлаҡ. Был килешеү йәш әсә үҙ урынына эшкә сыҡҡас та ғәмәлдән туҡтатыла. Шул уҡ ваҡытта был ҡатын билдәһеҙ ваҡытҡа тиклем төҙөлгән хеҙмәт килешеүе буйынса эшләүен дауам итә.

Хатта телгә алынған ниндәйҙер ярыш мәсьәләһенә килгәндә, ул бөтөнләй нигеҙһеҙ, сөнки эшкә сыҡҡан әсә һәм элек уның урынында эшләгән хеҙмәткәр төрлө вазифа биләй. Шуға иғтибар итегеҙ: эш биреүсе аныҡ кешене түгел, ә вазифаны ҡыҫҡарта, шунлыҡтан, әлбиттә, эш биреүсе ике вазифаның береһен ҡыҫҡарта ала.

Шул уҡ ваҡытта РФ Хеҙмәт кодексының 261-се статьяһы өс йәшкә тиклемге балаһы булған ҡатындарҙы ҡыҫҡартыу юлы менән эштән бушатыуҙы тыя. Законһыҙлыҡ осрағына тарыған хәлдә һеҙ үҙ хоҡуҡтарығыҙҙы законға ярашлы көйләргә ниәтләнеүегеҙ тураһында етәксегеҙгә иғәнәтле генә итеп еткеререгеҙ. Мәсьәләнең хәл ителеүе өсөн гәзәттә шул да етә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Бөйөрҙә таш булғанда



1-2 ҡалаҡ ҡара eләк япрағы, һары мәтрүшкә, меңъяпраҡ, йүкә сәскәһе, кесерткән япрағы, әлморон емеше, аҡ петрушка тамырын 2 стакан ҡайнап торған һыуҙа 1 сәғәт төнәтергә. Сәғәт һайын яртышар стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 10 көн. Төнәтмә таштарҙы иретә.

### Йәрәхәтте дауалау

10 грамм ҡарама ҡайырыһын төйөп, 30 грамм ҡайнаған шарапҡа һалаһың һәм 10 грамм төйөлгән әнис ҡатнаштырып, яман шешле йәрәхәткә ябаһың.

### Кәйеф ҡырылмаһын өсөн

❖ Тышҡы ишек төбөнә эреле-ваҡлы ҡыңғырауҙар элеп ҡуй. Уларҙың тауышы кешене тынысландыра.

❖ Өйҙә абаға гөлөн үҫтерегеҙ, ул кәйефте күтәрә.

❖ Вельвет кейем кейергә тырышығыҙ. Һис юғында, вельвет одеял ябынып йоҡлағыҙ. Был туҡыма - кеше өсөн бик ҙур энергия сығанағы.

### Быуындарға тоҙ ултырмаһын, тиһәң

1 кг керәнде ит турағыстан үткәрергә лә 4 литр һыу ҡойорға, 5 минут ҡайнатҡас, һыуытып һөҙөргә. 0,5 кг бал ҡушырға, яҡшылап болғатырға. Ҡатнашманы һыуытҡыста һаҡларға. Көн һайын 1-әр стаканлап эсергә. Был дауаны яҙ һәм көҙ эшләргә кәрәк. Шул саҡта быуындарға тоҙ ултырмаҫ.

### Тырнаҡтарҙы ла онотмайыҡ

Ғәҙәттә, ҡайһы бер кешеләрҙең тырнаҡтарында тәрән һырҙар барлыҡҡа килә, аҡ таптар төшә. Был витаминдар етешмәүен күрһәтә. Улар өсөн махсус дарыуҙар ҙа бар. Лак түгел, ә шул дарыуҙарҙы һөртөргә кәрәк. Көн һайын 1-2 мәртәбә һөртәһең.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**




# ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Бишенсе өгөт

Бер кеше өсөн икенсе бер кеше менән арағыҙҙы боҙмағыҙ. Уларҙың дуҫлашыуы ихтимал. Һеҙ иһә дошман булып ҡалырһығыҙ. Матур эштәрҙе күреп тороусы күҙҙәр һәм яҙып ултырыусы ҡәләмдәр бар. Шуның өсөн изгелекле эштәрегеҙ хаҡында халыҡтарға фаш итергә тырышмағыҙ. Аҡылға ҡарағанда теле ҡеүәтле кеше менән дуҫ булмағыҙ. Дин өсөн ҡайғынан башҡа ҡайғыларҙы ҡайғы тип һанамағыҙ. Аҡылығыҙҙан башҡа дөрөҫ нәсихәт биреүсене эҙләмәгеҙ. Наҙанлығығыҙҙан башҡа дошмандарығыҙҙан ҡурҡмағыҙ. Булмаҫлыҡ өмөттәрҙән артыҡ ялғансы, әжәлегеҙҙән артыҡ вәғәҙәлә тороусы юҡтыр. Үҙ фекеренә хайран кешеләргә аҡыл бирмәгеҙ. Аллаһы Тәғәлә фарыз иткән нәмәләрҙе иғтибарһыҙ ҡалдырмайынса, ваҡытында үтәгеҙ. Харамды эшләү түгел, хатта эшләргә лә уйламағыҙ. Быларҙың уртаһында булғандарын күп тикшереп йөрөмәгеҙ, боҙоҡ эшкә ниәт итеп башламағыҙ. Ғилем нурын гонаһ менән һүндермәгеҙ. Тәҡүәлектән гүзәл кейем эҙләмәгеҙ. Әҙәпһеҙ тәбиғәт матур булмаҫ, тырышмайынса белем табылмаҫ, быны белегеҙ. Донъяла бер көн файҙа булһа, икенсе көн зарар булыр. Әҙәм балаһы ошо көндәрҙе сиратлаштырып үткәрә. Ләкин һәр икеһен дә әжәл сәфәре икәнен белеп, уға матур әҙерләнегеҙ.

## Алтынсы өгөт

Аллаһы Тәғәлә хәҙрәтенән Ҡөрьән шәрифенә барығыҙ ҙа бергә йәбешегеҙ, һис айырылмағыҙ. Арағыҙҙа булған дошманлыҡ һәм ҡаршылыҡтарҙы ташлағыҙ ҙа дуҫ булығыҙ. Шәриғәт шәриф һәм милләткә ярҙам өсөн бөтә һиммәтегеҙҙе сарыф итегеҙ. Мәртәбә һәм олуғлыҡ һөйөү менән ауырымағыҙ. Фәҡир һәм зәғифтәрҙең ҡулдарынан тотоғоҙ, уларға ярҙам бирегеҙ. Аллаһы Тәғәлә харам иткән урындарға ваҡыт һәм аҡса исраф итмәгеҙ. Йоҡонан уянығыҙ һәм күҙегеҙҙе яҡшы асып, донъя тәртибен күрегеҙ. Ниндәй фәҡирлек һәм наҙанлыҡ эсендә булғанығыҙҙы аңларһығыҙ. Балаларының тәрбиәһе һәм белем алыуҙарын һис ҡайғыртмаған һәм байлыҡ сарыф итмәгән хәлдә, иҫерткес һәм фәхишәләр өсөн бөтөн хазиналарын сарыф иткән аталар күп. Ирҙәре бер ҡаҙаҡ икмәк табыу өсөн ғажиз булып йөрөгән хәлдә, кейәү көткән ҡыҙҙар кеүек кейенеп, урамда йөрөгән ҡатындар күп. Ҡыҙҙарына бер хәреф матур холоҡ өйрәтмәгән хәлдә, шәриғәт исламдың иң бөйөк һәм иң хөрмәтле йома көндәренә йәш егеттәр һәм ҡәрҙәш булмағандар менән уйнарға ебәргән һаҡаллы сабыйҙар күп. Бындай хәлдәр күңел күҙенең һуҡырайыуына һәм күңелдең ҡарайыуының олуғ дәлилелер. Һәр эштә түбән һәм фәҡир, наҙан һәм артта ҡалыуыбыҙға сәбәп һис кем түгел, үҙебеҙҙер. Аллаһы Тәғәләнән бирелгән ниғмәттәрҙең китеүенең төп сәбәбе бәндәләр үҙҙәре булыр. Шуның өсөн был хәлдәрҙән ғибрәт алығыҙ. Һеҙҙең ҡанатығыҙ аҫтында булған кеше һәм ғаиләгеҙҙе ислам тәрбиәһе буйынса тәрбиәләгеҙ. Үҙегеҙ холоҡ һәм фекер, иғтиҡат һәм ғәмәл, шәриғәт ҡушҡан юлда уларға үрнәк булығыҙ, дин юлынан йөрөүселәргә Аллаһы Тәғәлә ярҙамсы һәм хаҡ юлды эҙләүселәргә Аллаһы Тәғәлә дөрөҫ юлды биреүселер. Быныһы көн кеүек асыҡтыр.

**(Дауамы бар).**

*ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ*

# АЯҠЛЫ ЭНЦИКЛОПЕДИЯ, ТИҘӘР

## Рамазан Үтәғолов тураһында



**Рамазан Исмәғил улы Үтәғолов тураһында һүҙ сыҡһа, Баймаҡ, Сибай яҡтарындағы таныштары, дуҫ-иштәре: " Ул иҫ киткес хәтерле, кешелекле, саф күңелле, ярҙамсыл һәм ғыймлы кеше, беҙҙең яҡтың тарихын унан да яҡшы белгән кеше юҡтыр. Беҙҙең төбәктә берҙән-бер аяҡлы энциклопедия инде ул", - тип һүҙҙе дауам итеп, йомғаҡ яһап ҡуйыусандар.**

Һикһән йәшен тултырған көндәрендә Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылында тыуып үҫкән был ир уҙаманы тураһындағы ҡайһы бер йылы хәтирәләрем менән уртаҡлашырға булдым мин дә. Сыңғыҙ - күренекле шәхестәр биргән боронғо башҡорт ауылы. Шул шәхестәр рәтендә, әлбиттә, БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, РФ-ның мәғариф алдынғыһы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, күп миҙалдарға лайыҡ булған, урындағы Батыр Вәлид, Рамазан Өмөтбаев исемендәге премиялар лауреаты Рамазан Үтәғоловтың исемен дә атарға кәрәк.

Рамазан Исмәғил улы ғүмере буйы педагогик эштән айырылманы. Магнитогорск педагогия институтын тамамлағас, дипломлы уҡытыусы тәүҙә Баймаҡ районы мәктәптәрендә уҡытыусы, директор, халыҡ мәғарифы бүлегендә мәктәптәр буйынса инспектор, 1958-1966 йылдарҙа Баймаҡ, Әбйәлил, Йылайыр райондарын бергә ҡушып ойошторолған халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире, хаҡлы ялға сыҡҡансы Сибай ҡала мәктәптәрендә директор булып эшләй.

Рамазан Исмәғил улы хаҡлы ялға сыҡҡас та әүҙемлеген ташламаны. Тыуған яҡтың тарихын, күренекле шәхестәрҙең тормош юлын өйрәнә башланы. Тиктормаҫ, абруйлы шәхес 80 йәшендә тынғы белмәй, алдына алғанын ҡуймай, саба, йүгерә, юллай. Миҫалға: Башҡорт дәүләт филармонияһына Хөсәйен Әхмәтов исемен бирҙереүҙә лә уның ныҡышмалылығы, тырышлығы, уның ошо исемде юллап яҙған яҙмалары, сығыштары ҙур роль уйнаны.

Уны үҙ йортонда тап итермен, тимә. Бер ҡараһаң, ул Сибай башҡорттары ҡоролтайы ағзаһы булараҡ, шунда кәңәшмәлә ҡатнаша, һуғыш һәм тыл ветерандары менән аралаша, уларҙың проблемаларын хәл итеүҙе юллап йүгереп йөрөй. Икенсе ҡараһаң, ауылдан ауылға йөрөп, мәғлүмәтле оло ҡарттарҙан тарихи материалдар, ауыл тарихы, ер-һыу атамалары буйынса легендалар йыя. Өсөнсө ҡараһаң, замандаштарының, күренекле тарихи шәхестәрҙең юбилей, ҡәҙер һәм хәтер кисәләрендә ҡатнаша, сығыш яһай. Дүртенсе ҡараһаң, Ырымбур, Өфө ҡалаларына барып, аҙналар буйы архив материалдарын, ауылдар тарихын, шәжәрәләрҙе, ғилми әҙәбиәтте ентекләп тикшерә, өйрәнә, яҙыласаҡ китаптарына материалдар туплай. Эҙләнеүҙәрҙең һөҙөмтәләрен барлап, район һәм республика матбуғат баҫмаларына тәҡдим итә. Урындағы "Һаҡмар", "Атайсал" гәзиттәренең, республика гәзит-журналдарының да әүҙем хәбәрсеһе ул. Күп томлы "Башҡортостан энциклопедия"һының даими хәбәрсеһе булараҡ, һуңғы баҫылған томдарында уның 50-гә яҡын мәҡәлә-мәғлүмәте урын алған.

Йоҡоһоҙ төндәр, оҙаҡ эҙләнеүҙәр нәтижәһе емештәре булып уның туғыҙ китабы баҫылып сыҡты. Рамазан Исмәғил улы һәр баҫмаһын архив материалдарына нигеҙләнеп, ваҡиғалар булған урындарҙа булып, шул осорҙоң шаһиттары менән осрашып, беҙҙең төбәктә булған тарихи хәл-ваҡиғаларҙы кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәргә таянып ижад итә. Китаптар юғары уҡыу йорттары, мәктәп уҡытыусыларына, студенттарға, уҡыусыларға әҙер ҡулланма булып та хеҙмәт итә.

- Һәр кем үҙ халҡының тарихын, үҙенең тыуып үҫкән яғын, унда булып үткән тарихи хәл-ваҡиғаларҙы, шәжәрәһен, тоҡом-тамырҙарын, нәҫел-ырыуын белергә бурыслы, әгәр үткәнеңде белмәһәң, киләсәгең булмаясаҡ, - ти мәғариф ветераны.

Шулай ул һәр бер яҙмаһында ошо фәлсәфәне олоһоноң да, кеseһенең дә аңына һеңдерергә тырыша. Был изге бурысты уға бер кем дә йөкмәтмәгән. "Һин шунда бар, һин шуны эшлә!" тип унан берәү ҙә талап итмәй. Әммә ул йәмғиәттең аңлы, белемле, халҡының, иленең ысын патриоты булараҡ, үҙ инициативаһы, намыҫ ҡушыуы буйынса эшләй. Китаптарындағы һәр фекере фәһемле, төплө, ышандырырлыҡ булғанға, халыҡ күңеленә тәьҫир итеүсән. Халҡыбыҙҙың онотолған, онотолорға дусар ителгән шәхестәренең тормош юлын, тарихи ҡиммәттәрҙе ташҡа баҫтырыу үҙе бер батырлыҡ. Киләсәк быуынға мираҫ, аманат, ҡомарҡлы булып ҡаласаҡ уның китаптары.

**Азамат ТАЖЕТДИНОВ,**
**мәғариф ветераны.**
**Сибай ҡалаһы.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# ҒҮМЕРЕҢДЕ МАТУР УҘҒАР - һин үлгәндә донъя илап ҡалһын

- Күп йомошсолама - йомош ул аяҡташ, һоранырға ҡушып ҡына, төртөп кенә тора.
- Ғүмер - ул иҫтә ҡалған бәхетле мәлдәр генә, шуға күрә эргәңдәге бәхетте күреп өйрәнергә кәрәк.
- Тоғро һәм дөрөҫ йәшәйем тиһәң, ололарҙың тормош тәжрибәһенә, аҡылына, йәштәрҙең көсөнә таян.
- Бейек тауҙың артында алтын күп тип артылғансы, ҡулыңдағы баҡырҙы ысҡындырма.
- Етем-еһерҙең, ауырыу, фәҡирҙең өлөшөнә теймә - ас эттең ҡойроғон туҡ эт һоғонған кеүек булырһың, оятҡа ҡалырһың.
- Теләнсегә терәлмә - ауыҙындағын тартып алыр, ялҡауға яҡынайһаң, йоҡларға яҫтығыңды тартып алыр, егәрлегә илекһәң, болланырһың, бәҫең артыр.
- Эйәһенә ҡарап, яман менән яҡшы ҡосаҡлашып йоҡлай - ниндәй эйә булыуҙы үҙең һайла.
- Данлыларҙың даны аша дан эҙләмә - ундай дан сүп-сар кеүек елгә осор.
- Мөһим һәм яҡшы эштәр эшләргә ниәтләнһәң, күңелеңде керҙән, боҙоҡлоҡ кеүек насарлыҡтарҙан таҙарт - хаҡ юлға баҫырһың.
- Йәшәйешеңдә халҡың менән аранда пәрҙә, йәғни мин-минлек, тәкәбберлек булмаһын, һаҡ бул - һәләк булырһың.
- Аңламаған көйө көсөң етмәҫтәй эшкә тотонма - был наҙанлыҡ һәләкәткә һәм енәйәткә килтерә.
- Тормош бер көн ҡыйынлыҡ тигән суҡмары менән осора һуға, икенсе көн мамыҡтай ҡулы менән баштан һыйпай - икеһенә лә түҙгәндәр генә тура юлдан яҙмай.
- Ғүмереңде матур һәм дөрөҫ уҙғар - һин үлгәндә донъя илап ҡалырлыҡ булһын.
- Икмәгең уңмай һүлле бешһә, көйәләнмә: икмәк һүлле булһа, егет елле була.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Эпоста, Тәүраттағы кеүек, тыйылған аҙыҡ - ҡан, боҙлоҡ ireү сәбәпле ике бөйөк һыу баҫыу, Нух кәмәһе тарихы, тау баштарына кешеләрҙе кәмәләрҙә ташыу күренештәре бар.*



*ЙӘШӘГӘН БИТ БАТЫРҘАР!*

**Быйыл "Урал батыр" эпосын яҙып алыуға 100 йыл тулды. Быға тиклем ул башҡорт сәсәндәренең мендәрсә быуынынан телдән-телгә тапшырыла килгән. Был уникаль эпос беҙгә нисек килеп еткән? Артабанғы яҙмышы ниндәй буласаҡ? Алыҫта ҡалған 1907 - 1910 йылдарҙа башҡорт халҡының иҫәбен алыу үткәрелә. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында иҫәп комиссияһында тәржемәсе булып йәш егет - Мөхәмәтша Буранғолов эшләй. Ҡышын ул Ырымбурҙа "Хөсәиниә" мәҙрәсәһендә белем эстәй, ә йәйгеһен ауылдар буйлап йөрөп, башҡорттарҙың иҫәбен ала. Шунда уҡ төрлө фольклор материалдары йыя.**

# "УРАЛ БАТЫР"ҒА НИСӘ ЙӘШ,

## йәки Халыҡ хәтере яҙма документтарҙан ғүмерлерәк

1910 йылдың йәйендә яҙмыш уны Бөрйән олоҫоноң (хәҙер Баймаҡ районы) Икенсе Иҙрис ауылында йәшәп ятыусы билдәле сәсән Ғәбит Арғынбаев менән осраштыра. Унан М. Буранғолов бер нисә эпик әҫәр, шул иҫәптән "Урал батыр" эпосын да ишетә һәм уның һүҙҙәренән яҙып ала. Икенсе Этҡол ауылында ул Хәмит сәсән Әлмөхәмәтовтан был эпостың икенсе вариантын яҙып ала. Ғәбит сәсән үҙ сәнғәтенә Ишмөхәмәт Мырҙаҡаевтан өйрәнә, ә ул эпостарҙың йөкмәткеһен һәм уны башҡарыу оҫталығын Байыҡ сәсәндән ала. Был исемдәр "Урал батыр" эпосын мендәрсә йылдар һуҙымында телдән-телгә тапшырыусы халыҡ сәсәндәренең һуңғылары була.

Бына парадокс! Оҙон ғүмерле кеше хәтере тиҫтә мең йылдар аша халыҡ ижадын яңы замандарға алып сыға. Әммә М. Буранғолов үҙ ваҡытында был эпосты яҙып алмаһа, ул заман ағышында эҙһеҙ юғалырға ла мөмкин ине. Ғәбит сәсән менән Хәмит сәсән фажиғәле 1921 йылда астан үлә.

Башҡорт сәсәндәре тулыһынса үҙ халҡының яҙмышын бүлешә. М. Буранғоловты яҙыусылыҡ эшмәкәрлеге өсөн дүрт тапҡыр ҡулға алалар, 1950 йылда махсус кәңәшмә уны 10 йылға иркенән мәхрүм итә. Ул бары тик 1956 йылда ғына төрмәнән азат ителә. 1959 йылда БАССР Юғары суды тарафынан тулыһынса аҡлана. Уға халыҡ сәсәне исеме кире ҡайтарыла. Әммә азат ителгәндән һуң да М. Буранғоловҡа эшләргә ирек бирмәйҙәр. Коммунизм идеологтары башҡорт халҡының тарихын боҙоп күрһәтеүгә күп көс һалды. Әйтерһең дә, башҡорттарҙың тарихы күптән түгел Урта Азияның ҡомдарында, X быуатта башланған һәм шул ваҡыттан алып ул ярлылар менән байҙарҙың көрәше булараҡ дауам итә. М. Буранғолов яҙып алған эпостар иһә башҡорт халҡының бөтөнләй икенсе тарихын һөйләй. "Урал батыр" поэтик телдә башҡорттарҙың таш быуаттан башланған тарихы Урал тәбиғәте менән айырылғыһыҙ берлектә булыуын бәйән итә. Беҙгә тәүтормош кешеләренең тормошо тураһындағы хикәйәт килеп етә. Уға оҡшаш нәмәләрҙе Мысыр пирамидаларында ла, боронғо Шумерҙың балсыҡ пластиналарында ла табыу мөмкин түгел.

"Урал батыр" эпосының яҙыла башлауының ваҡытын билдәләргә тырышып ҡарарға мөмкин. Уҡыусыға, бәлки, артыҡ ҡыйыу булып күренгән, шул уҡ ваҡытта йәшәүгә хоҡуғы булған версияны тәҡдим итергә баҙнат итәм.

Был эпоста йорт хайуандары араһында арыҫлан телгә алына. Балалар уны менеп йөрөй, уны бәйләп ҡуялар, арыҫлан, тип атайҙар. Тәү ҡарашҡа, был - мифик образ, әммә борон Уралда арыҫландарҙың ысынлап та кеше менән йәнәш йәшәүен раҫлаусы мәлдәр бар. Беренсенән, эпос менән башҡорттоң "Арыҫланға атланһаң, ҡамсың ҡылыс булһын", тигән мәҡәле ауаздаш. Мәҡәлдәр миф нигеҙендә тыумай. Бынан тыш, башҡорт телендә арыҫлан һүҙенән сыҡҡан һүҙҙәр бар: "арҫ" - эттең ҡапыл асыулы өрөүен белдерә; "арҫылдау" - туҡтамай өрөү.

Ысынлап та, археолог С. Бибиков иртә таш быуатта кеше үҙләштергән өҫкө палеолитта Йүрүҙән үҙәнендәге мәмерйәлә мәмерйә арыҫланының һөйәктәрен таба. Һуңыраҡ, неолит осоронда, һуңғы таш быуатта кешеләр йәшәгән мәмерйәләрҙә археологтар мәмерйә арыҫланының ҡалдыҡтарын тапмай. Шул уҡ С.Бибиков шунда уҡ, Йүрүҙән үҙәнендә, Буран мәмерйәһе һәм Старичный һыртында боронғо кешеләрҙең неолитик туҡталҡаһын тикшереп, бары тик беҙҙең заманға тиклем һаҡланған ат, мышы, болан, һоро айыу, төлкө, һуҫар, ҡуян, ҡондоҙ, һ.б. хайуандар ҡалдыҡтарын таба.

> Шулай итеп, ошо мәмерйә арыҫландары ҡалдығы нигеҙендә беҙ "Урал батыр" эпосының яҡынса барлыҡҡа килеү ваҡытын өҫкө палеолит, иртә таш быуат тип билдәләй алабыҙ. Тимәк, уға 10-35 мең йыл. Был эпос иртә таш быуатта ла башҡорт телле тормош булыуы тураһында һөйләй. Уны барлыҡҡа килтереүсе халыҡ билдәле - улар боронғо ата-бабаларыбыҙ. Тимәк, башҡорт халҡы иртә таш быуатта уҡ бергә туплаһып, үҙ теленә эйә булған. Хатта телгә эйә булып ҡына ҡалмаған, ә әҙәби-тарихи әҫәрҙәр ижад иткән.

"Урал батыр" эпосы - башҡорт халҡының үҙ телендә, үҙенең тарихи ерендә, Уралда башланған тарихының һәм мәҙәниәтенең башы.

"Урал батыр" тарих ҡына түгел, Тәңрелектең - кешелек тарихында тәүгеләрҙең береһе булып барлыҡҡа килгән монотеистик диндең бөйөк хикәйәте. Иудаизмдың изге китабы Тәүрат үҙ тарихының төп мәлдәренә бәйле "Урал батыр" эпосы менән ҡайһы бер уртаҡлыҡтарға эйә. Эпоста, Тәүраттағы кеүек, тыйылған аҙыҡ - ҡан, боҙлоҡ иреү сәбәпле ике бөйөк һыу баҫыу, Нух кәмәһе тарихы, тау баштарына кешеләрҙе кәмәләрҙә ташыу күренештәре бар.



> Уралдың Минотавр үгеҙен еңеүе Уралға һинд-европалылар- арийҙар тарафынан килтерелгән сит диндән баш тартыуҙы ғына түгел, ә үгеҙҙе ризыҡ итеп ҡулланылыр хайуандар рәтенә күсереүҙе символлаштыра. Бәләкәй генә деталь: Урал үгеҙҙе шул тиклем ергә нык алып бәрә, уның хатта тояҡтары ярыла һәм икегә бүленә. Был символ, һәм уның аңлатмаһы шулай: борон бары тик ҡуш тояҡлы малдарҙы ғына ризыҡ итеп файҙаланырға рөхсәт бирелгән.

Шулай итеп үгеҙ, тимәк, һыйыр ҙа, һинд-европалылар - арийҙарҙың тотемы булып, эпоста Ҡатил батша иленән килтерелгән, тип һүрәтләнә.

"Урал батыр" эпосында диндәрҙе бүлгеләгән, шуның өсөн үҙ ҡәбиләһенән ҡыуылған яңы бәйғәмбәр барлыҡҡа килеүе, арийҙарҙың бер өлөшөнөң Уралдан китеүе тураһында һөйләнелә. Бында эпос зороастрийҙарҙың изге яҙмаһы Авеста менән киҫешә. Был замандаштарыбыҙҙың берҙән-бер Заратустра тураһында ситләтеп кенә иҫкә алыуы. "Урал батыр" тексында зороастризмға ҡараған ҡайһы бер башҡорт ғөрөф-ғәҙәттәренең, мәҫәлән, Ҡарға туй сығанағын табабыҙ.

"Урал батыр" эпосы Тәүрат һәм Авеста менән генә түгел, ә ҡырғыҙҙарҙың "Манас" эпосы менән дә ауаздаш. Ҡырғыҙҙарҙа Иштәк, башҡорттарҙың ата-бабаһы, әсәһе яғынан легендар Манастың бабаһы булып сыға. Башҡорттарҙың һәм ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарҙың боронғо мөнәсәбәттәрен иҫәпкә алһаң, был аңлашыла ла.

Тик был яҙмаларҙың һәм хикәйәттәрҙең яҙмышы ғына төрләсә. Христиан динендә Тәүраттың популяр булыуы тураһында һөйләүҙең кәрәге лә юҡ. Һуңғы ваҡытта ғалимдар зороастризмға һәм Авестаға ныҡлы иғтибар бүлә башланы, хатта авестологтар барлыҡҡа килде. Бер нисә йыл элек донъя кимәлендә тантаналы шарттарҙа ҡырғыҙ эпосы "Манас"тың яҙыла башлауына мең йыл тулыу киң билдәләнде.

Башҡорт тарихы классиктары тип һаналған ғалимдарыбыҙ үҙҙәренең хеҙмәттәрендә "Манас" эпосына һәм уғыҙҙарҙың боронғо дастаны "Уғыҙнамә"гә бер ни тиклем мөрәжәғәт итә, тик бына башҡорт тарихын яҙғанда "Урал батыр" эпосына ғына иғтибар бирмәне. Эпос башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүендәге күсмә тормош концепцияһына ла ҡаршы килә бит.

Урал батыр, реаль шәхес булараҡ, хатта боронғо гректарға ла билдәле булған. Улар үҙҙәренең бронза дәүере башында металл ҡойоу өсөн сеймал эҙләп, төньяҡҡа киткән ырыуҙаштарын гиперборей скифтары тип атаған. Ошо гиперборей скифтары (һинд-европалылар - арийҙар) Урал батырҙы, уның барлыҡ Урал халҡына башлыҡ булғанын иҫләй, уны праатай, беренсе халыҡ юлбашсыһы "эллин аллаһы Уранус" тип иҫәпләй. Был хаҡта В. Татищев та билдәләй. Ул боронғо грек шағиры Пиндарға (б.э.т. 518-442) һәм XV быуат һуңында нәшер ителгән Свидас исемле халыҡ тураһындағы лексиконға (ул ваҡытта энциклопедик һәм һүҙлек баҫмаларын шулай атайҙар) һылтанма яһай.

Боронғо гректар Урал батырҙы Уранус тип атай. Әгәр гректарға хас булған ялғауҙы алып ташлаһаҡ, Уран тороп ҡала. Ошо исем аҫтында Урал батыр грек мифтарына инеп ҡала, уның исеме Ҡояш системаһындағы ҙурлығы буйынса өсөнсө урында торған планетаға - Уран - бирелә.

Күреүебеҙсә, сит сығанаҡтарҙа Урал батырҙың реаль кеше - башҡорттарҙың боронғо атабабаларын - иштәктәрҙе, Уралға Ҡара диңгеҙ буйы далаларынан һәм Кавказдан килгән һинд-европалыларҙы - арийҙарҙы туплаған ҡәбилә берләшмәһе башлығы булыуын күрһәтә. Ул ваҡыттағы ғөрөф-ғәҙәттәргә ярашлы, уны аллалаштыралар, ихтирам итәләр, ҡәбиләләренең билдәле ҡыҙҙарын кәләшлеккә бирәләр. Уның улдары һәм ҡустыһы уға буйһонған ерҙәрҙә хаким була. Властағы династиялыҡ - боронғо дәүләт булыуҙың мөһим билдәһе.

"Урал батыр" эпосы донъя әҙәбиәтенең текст төҙөлөшө буйынса боронғолоғона тиңе булмаған уникаль әҫәре булып тора. Үкенескә күрә, ул донъя мәҙәниәтендә үҙенең лайыҡлы урынын алмаған әле. Әммә тап шундай донъя кимәлендәге ҡаҙаныштар милләттең абруйын формалаштыра. Берәй ваҡыт эпостың персонаждары һәм ошо донъя мәҙәниәтенең бөйөк ҡаҙанышын беҙгә һәм килер быуындарға тапшырған замандаштарыбыҙҙың иҫтәлеге мәңгеләштерелер, тип ышанам.

**Радик ВАХИТОВ, тарихсы.**

***✓ Ғаиләлә ҡырҡ урындан тыйылған ҡыҙ баланың фиғеле өмөтләрәк, тип уйлайым. Шуға, кәләш һайлағанда, ҡыҙҙың ғаиләлә нисек тәрбиәләнеүенә, шул уҡ ваҡытта әсәһенә лә ҡарап һайларға кәрәк.***



# Йәштәребеҙ араһында

## тик ата-әсәләр араһында

**Тарихтың ниндәй генә мәлен алып ҡарайыҡ, яңылыҡҡа, яңыса тормошҡа юлды һәр саҡ йәштәр ярған. Халыҡ азатлығы өсөн оло көрәш юлына баҫҡанда Салауатҡа - 22, Вәлидигә - 24, Бабичҡа 22 йәш кенә булған. Был шәхестәр һөйөр-һөйөләр генә йәшендә ил, милләт азатлығы өсөн оло көрәшкә күтәрелгән. Ә хәҙерге 20-24 йәшлек йәштәр ниндәй эштәр башҡара һуң? Күптәре ҡулына һыра шешәһе тотоп, дискотекала болғаңлай, күңелен зәғифләгән, яҙмышын емергән башҡа төрлө йәмһеҙ ваҡиғалар эсендә бутала. Әммә ошо кире мөхиткә эләкмәҫкә тырышып, үҙ-үҙенә юл ярыу менән булған йәштәребеҙ ҙә бихисап. Уларҙы тормош байтаҡ һорауҙар һәм һынауҙар алдына ҡуя. Бөгөнгө ҡорҙа БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай эргәһендәге Йәштәр йәмәғәт палатаһы ағзаһы, Өфө ҡалаһының Йәш яҡташтар ойошмалары ассоциацияһы рәйесе, Башҡорт дәүләт аграр университеты студенты Илнур ҠОТЛОӘХМӘТОВ һәм Өфөләге Баймаҡ йәштәре ойошмаһы рәйесе, Өфө дәүләт авиация техник университеты студенты Дим ВӘЛИЕВ менән йәштәребеҙ тураһында фекер алышабыҙ.**

**▸ Ғаиләлә матур тәрбиә алған йәш кеше, мәҫәлән, Өфөгә уҡырға килде, ти. Ул осраҡлы ғына ҡалалағы ниндәйҙер насар мөхиткә эләкһә, шул мөхит уны үҙгәртә аламы?**

**Илнур:** Иң мөһим осор - уҡыу йортоноң беренсе курсы, ҡалалағы тәүге йыл. Беренсе курста йәш кешенең артабанғы тормошона төп юл һалына. Беренсе курстан уҡ кемдер яҡшы уҡып китә, ә кемдер эсә, тарта, илке-һалҡы ғына уҡып йөрөй. Мәҫәлән, бер бүлмәлә йәшәгән дүрт егеттең береһе генә тәмәке тарта икән, ти, күпмелер ваҡыт үтеү менән ҡалғандары ла был яман ғәҙәткә ылыға ла китә. Кеше, нишләптер, яман ғәҙәткә анһатыраҡ өйрәнә бит. Хәйер, аңлашыла инде: яҡшы ғәҙәт өсөн көсөргәнеш, хеҙмәт талап ителә.

Ниндәй мөхиткә барып эләгеүең һинең алдағы тормошоңа ҙур йоғонто яһай. Бөтә кешегә лә мөхит насар тәҫир итә, тип әйтә алмайым. Ауылда әүҙем тормош менән йәшәгән, йәштәштәре менән йыш аралашҡан, олимпиада, ярыштарҙа ихлас ҡатнашып йөрөгәндәр була. Улар үҙ аллы фекерләргә, күп нәмәне сағыштырып ҡарарға өйрәнә. Ундай кешегә мөхит насар йоғонто яһай алмайҙыр.Күпселек осраҡта үҙ аллылыҡҡа өйрәнмәгән, үҙ аллы фекер йөрөтә, ҡарар ҡыла алмаған, шулай уҡ ғаиләһендә йүнле тәрбиә күрмәгәндәргә мөхит насар йоғонто яһайҙыр.

**Дим:** Ысынлап та, ауылдан ҡалаға килгән ҡайһы бер йәштәр үҙҙәрен бәйҙән ысҡынған кеүек хис итә. Әгәр йәш кеше ғаиләлә яҡшы тәрбиә алған икән, уға юлдан яҙыу янамайҙыр, тим. Шуға ла ата-әсә балаһына яҡшы тәрбиә биреүҙе ҙур яуаплылыҡ итеп күрергә бурыслы. Балаларың йүнле тәрбиә күрмәй икән, ул мотлаҡ һинең йөҙөңә ҡыҙыллыҡ килтерәсәк, ҡартлығың тыныс булмаясаҡ икәнен һәр саҡ иҫтә тоторға тейешһең.

Ауылда күп ата-әсәләр балаларын артыҡ ҡурсыйҙар, аҙым һайын тыялар, хатта уларҙы үҙ тиңдәштәре менән аралаштырмайҙар. Тап шундай тәрбиә алған балалар ҡалаға килгәс ирек тоя. Күп кенә ҡайһы бер күренештәр менән тәүләп осраша һәм яҡшымы-насармы икәнлеген айырмайынса, шуның йоғонтоһона инеп китеүе лә ихтимал. Тимәк, был осраҡта ауылда иң тәртипле тип һаналған өлгөлө бала, ҡалаға килгәс, иң тәртипһеҙгә әүерелә. Әлбиттә, баланы тыйырға ла кәрәк, әммә тәрбиә тик тыйыуҙан ғына тормаһын.



**Илнур:** Димдең һүҙҙәренә ҡушылам. Ғаиләлә бала күңеленә ниндәй нигеҙ һалына, артабанғы тормошо ла шул нигеҙҙә дауам итә. Ауылда ғына йәшәп, ситкә сығып йөрөмәгән кешеләрҙең балаларының аң даирәһе бер ни тиклем сикләнгән була. "Йөрөгән таш шымара, ятҡан таш мүкләнә" тигән әйтем был осраҡта урынлылыр. Шуға күрә, балаға ни тиклем иртәрәк төрлө түңәрәктәргә, олимпиадаларға йөрөү мөмкинселеге булдырыла, шул тиклем уның киләсәге өсөн файҙалылыр. Шул уҡ ваҡытта, ҡыҙ баланы тәрбиәләгәндә ата-әсәнең тыйыуы барыбер ҙә урынлылыр, сөнки "Ҡыҙ кешене ҡырҡ урындан тый" тигән мәҡәл дә бар бит. Бына әле иң күңелде ҡырғаны - ҡайһы бер ҡыҙҙарҙың һыра эсеп, тәмәке тартып йөрөүе. Бындай ҡыҙҙар нормаль әсә була алмаясаҡ. Кейәүгә сыҡһа ла, был ғәҙәттәрен ташлай алмаясаҡ ул. Ундай ҡыҙҙы кәләш итеп алһаң да, ул өйрәнгән ғәҙәттәренән арынмайынса, бер сәбәпһеҙ ҡунаҡтар йыясаҡ, байрамдар ойоштораса́ҡ. Һәр хәлдә, ғаиләлә ҡырҡ урындан тыйылған ҡыҙ баланың фиғеле өмөтләрәк, тип уйлайым. Шуға, кәләш һайлағанда, ҡыҙҙың ғаиләлә нисек тәрбиәләнеүенә, шул уҡ ваҡытта әсәһенә лә ҡарап һайларға кәрәк, тигән аҡыл яғындамын мин. "Әсәһенә ҡарап, ҡыҙын ҡос" тиҙәр башҡортта.

**▸ Йәш кеше тормошобоҙҙа оло бер афәткә әйләнгән эскелеккә лә иң тәүҙә ғаиләлә өйрәнә бит инде. Һәр хәлдә, Өфөгә уҡырға килгән йәш кешеләрҙең күбеһе ул шайтан һыуын ауылда тәмләп ҡараған, был тәңгәлдә тәжрибә туплаған...**

**Илнур:** Кеше эсергә яңғыҙы түгел, ә коллективта өйрәнә. Беҙҙә күп кенә атайҙар улдары әрменән ҡайтҡас, үҙҙәре менән бергә эсергә рөхсәт итә, йәғни фатиха бирә. Уға тиклем йәш кеше был шайтан һыуын дискотекаларҙа, йә башҡа урында тәмләп ҡараған була инде. Сөнки уға был шөғөлдө ниндәйҙер кимәлдә абруйы булған тиңдәше, өлкәнерәк кеше тәҡдим итә, һыраның йә башҡа иҫерткес эсемлектең емергес көсө тураһында хәбәрҙар булмаған йәш кеше уны татып ҡарауҙан баш тартмай. "Батырлыҡ өсөн берҙе генә...", йәки "Һин егетме, юҡмы..." кеүек алкоголь эсеп ебәреү ярҙамында иҫбатлау талап иткән бер-ике һүҙ йәш егеттә барлыҡҡа килгән икеләнеүҙе тиҙ үк юҡҡа сығара. Батырланып китер өсөн йәш кеше эсеп ебәрә. Тимәк, күп осраҡта үҫмер үҙенең оялыу комплексын еңер өсөн эсә башлай.

Ауылдарҙа был хәлде бер кем дә контролдә тота алмай. Ауылда йәштәрҙе тәрбиәләр кешеләр юҡмы әллә, тигән һорау тыуа. Һәр хәлдә, ауыл клубтарында тәртип һаҡлар ҡайһы бер участка милиционерҙарының, хатта мәҙәниәт йорто директорҙарының да йәштәр менән бергә ҡушылып, эсеп йөрөүен йыш күҙәтергә тура килә. Уҡытыусылар ҙа хәҙер элекке кеүек мәҙәниәт усаҡтарында дежурлыҡ ҡылмай. Ата-әсәләр һөйләүенсә, әле күптән түгел генә мәктәптәрҙә шундай йола булған: уҡытыусылар алмашлап һәр шәмбе кисен урамда, клубтар тирәһендә тәртип һаҡлаған. Әлбиттә, был хәлдән сығыу юлын эҙләргә кәрәк. Бына беҙҙең Йәш яҡташтар ойошмаһы ассоциацияһы был тәңгәлдә ниндәйҙер саралар күрергә тырыша. Үткәргән сараларыбыҙҙа айыҡлыҡты пропагандалайбыҙ. Ҡайһы бер район йәштәре беҙҙең ошондай сара үткәреүебеҙҙе һорап, үҙҙәре мөрәжәғәт итә башланы. Тимәк, йәштәр араһында был башланғыс бар.

**▸ Йәштәрҙең ял итеү урындарының береһе булған дискотекаларға иғтибарығыҙҙы йүнәлтке килә. Башҡорт йәштәре өсөн Өфөлә бындай кисәләр айырым да ойошторола хәҙер, әммә уларҙа ла эсеп болғаңлап йөрөгән егеттәребеҙ, һыра һемергән, тәмәке тартҡан ҡыҙҙарыбыҙ булыуы кәйефте ҡыра... Бәлки, башҡорт йәштәре өсөн ошондай дискотекаларҙағы кеүек эсергә мәжбүр итер шарттары булмаған башҡа саралар ойошторорға кәрәктер?**

**Дим:** Эйе, Өфөлә башҡорт йәштәре өсөн дә төн буйы бейей торған дискотекалар ойоштороla. Ойоштороусыларҙың ниәте изге, әлбиттә. Йәштәребеҙ башҡа клубтарҙа күҙәтелгән насар мөхиттән, хәүеф-хәтәрҙән ҡурсылған булһын, тигәнде күҙҙә тота улар. Әммә йәштәребеҙ барыбер ҙә башҡаларға оҡшарға тырышыуҙан, ана шул һыра, тәмәке ҡоллоғонан арына алмай. Шуға ла башҡорт йәштәре өсөн төнгө клубтарҙа таңға ҡәҙәре һуҙылған дискотекалар түгел, төрлө тематик кисәләр үткәреү яғындамын үҙем. "Тәмле нәмә күп булмай, күп булһа - тәмле булмай", тигән әйтем бар. Тәүҙә тантаналы кисә, ә һуңынан матур ғына дискотека үткәрелһә, унда бары тик сәй эсеп аралашыу ойошторолһа, яҡшы буласаҡ. Һуңғы 2-3 йыл эсендә беҙ, төрлө райондарҙың яҡташтар ойошмалары үткәргән саралар бына шулай үтә. Элегерәк йыш ишетелгән "Баймаҡ йәштәре осрашып, тағы ла һуғышҡан" кеүек һүҙҙәрҙе бөгөн ишетергә тура килмәй. Һуғыш-талаш сыҡмай, сөнки бындай кисәләргә килгән йәштәребеҙ алдына ҡуйылған төп талап -айыҡлыҡ. Күпселек йәштәр, бигерәк тә студенттар, эсер өсөн түгел, ә дуҫтары, яҡташтары менән аралашыр өсөн килә яҡташтар ойошмалары үткәргән сараларға.

**Илнур:** Башҡортса дискотекалар, әлбиттә, кәрәк. Милли музыкаға һелкенеп алыу барыһына ла оҡшай. Әгәр ҙә башҡортса дискотекалар булмаһа, йәштәребеҙ башҡа урындарҙа, башҡа сит көйҙәргә бейейәсәк. Тимәк, дискотеканың милли рух тәрбиәләүҙәге роле баһалап бөткөһөҙ. Бик күп таныштарым, дуҫтарым яҡташтар ойошмалары уҙғарған ритайым дискотекаларынан һуң яҡшы тәьҫораттары менән уртаҡлашҡаны бар. Элекке патриотик йырҙарҙы яңыса эшкәртеп, уларға яңыса биҙәктәр өҫтәүсе башҡорт ди-джейҙары ла күп кенә. Уларға яңы идеялар тәҡдим итергә, музыкаларын дискотекаларҙа яңғырата башларға кәрәктер. Был йырҙар матур ҙа, мәғәнәле лә бит.

Төнгө клубтарҙағы дискотекаға альтернатива эҙләргә кәрәк, әлбиттә. Ошо көндәрҙә күп кенә райондарҙа йәштәр

> ***Шуға ла башҡорт йәштәре өсөн төнгө клубтарҙа таңға ҡәҙәре һуҙылған дискотекалар түгел, төрлө тематик кисәләр үткәреү яғындамын үҙем. "Тәмле нәмә күп булмай, күп булһа - тәмле булмай", тигән әйтем бар. Тәүҙә тантаналы кисә, ә һуңынан матур ғына дискотека үткәрелһә, унда бары тик сәй эсеп аралашыу ойошторолһа, яҡшы буласаҡ. Һуңғы 2-3 йыл эсендә беҙ, төрлө райондарҙың яҡташтар ойошмалары үткәргән саралар бына шулай үтә. Элегерәк йыш ишетелгән "Баймаҡ йәштәре осрашып, тағы ла һуғышҡан" кеүек һүҙҙәрҙе бөгөн ишетергә тура килмәй. Һуғыш-талаш сыҡмай, сөнки бындай кисәләргә килгән йәштәребеҙ алдына ҡуйылған төп талап -айыҡлыҡ. Күпселек йәштәр, бигерәк тә студенттар, эсер өсөн түгел, ә дуҫтары, яҡташтары менән аралашыр өсөн килә яҡташтар ойошмалары үткәргән сараларға.***

# АЙЫҠЛЫҠ МОДАЛА,

## ошоно ҡабул итмәүселәр бар

ҡоролтайҙары үтәсәк. Ҡоролтайҙарҙа мотлаҡ был һорауҙарҙы күтәреп, фекер алышырға кәрәк. Ауыл йәштәренең ялын ойоштороуға ниндәйҙер үҙгәрештәр индерергә ваҡыт. Лидер булырлыҡ айыҡ йәштәр мәҙәниәт усаҡтарындағы сараларҙы ла контролгә алырға тейеш. Ундайҙар бар бит ауылдарҙа. Улар төрлө хужалыҡ эштәрен башҡарғанда алдан йөрөй, уларҙың эше лә, ашы ла бар, улар ауылдаштарына эш биреүсе лә. Ниңә уларҙы бына шундай мәҙәниәт усаҡтарындағы, мәктәптәрҙәге тәрбиәүи сараларға ла йәлеп итмәҫкә?

**Йәштәрҙең тәрбиәле йә тәрбиәһеҙ булып китеүенә йоғонто яһай торған ғаилә, мәктәп, юғары уҡыу йорто кеүек тәрбиә институттары тураһында һөйләгәндә, мөхит тәрбиәһен дә әйтеп үттек. Ҡаланы ҙур ҡаҙан менән сағыштыралар. Ул бөтәһен дә бер массаға әүерелдерә. Һеҙҙең яҡташтар ойошмалары йәштәребеҙ ошо массала иреп, юғалып ҡалмаһын, туғандары, таныштары, дуҫтары менән осрашып, аралашып йәшәүҙе ғәҙәткә әйләндерһен, бер-береһенә таяныс булырға өйрәнһен өсөн күпте эшләй, шулай бит?**

**Илнур:** Эйе, Өфөлә төрлө райондарҙың яҡташтар ойошмалары ҙур көстө тәшкил итә, тип уйлайым. Үҙемдән алып әйткәндә лә, мин ошо ойошмаларға рәхмәтлемен. Өфөгә килгәс, тап ошо ойошмалар аша алдынғы ҡарашлы йәштәр менән аралашып, фекерҙәштәр, дуҫтар таптым. Әгәр ҙә мин был сараларҙан ситтә йөрөһәм, университет менән ятаҡ юлын ғына тапар инем. Ябай студенттың тормошо шунан ғибәрәт - бер-нисә тапҡыр Салауат һәйкәле янына сығып килә лә, вәссәләм бит инде...

Хәҙерге ваҡытта башҡа райондарҙағы дуҫтар менән бергә фекерҙәр уртаҡлашып, бер маҡсатта йәшәйбеҙ. Башҡаларҙы ла әйҙәү - беҙҙең төп йүнәлештәребеҙҙең береһе. Кемгәләр нимәнелер өйрәтер алдынан уны үҙең белергә тейешһең. Әле беҙ һөйләшеү алып барған тәрбиә темаһында, мәҫәлән, тәүҙә үҙең өлгө күрһәтә алмаһаң, ҡоро һүҙ һөйләп кенә йөрөү булыр ине, артындан башҡаларҙы әйҙәй ҙә алмаҫ инең.

Ысынлап та, ниндәй ҙә булһа берәй сара үткәрер алдынан сараның ҡайһы урында үтәсәге тураһында уйларға кәрәктер. Йәштәребеҙ йыйылған ерҙәрҙә спиртлы эсемлектәр һатылмаҫҡа тейеш. "Өфө уттары" клубында үтә икән ул сара, әлбиттә, йәштәребеҙ был клубтың формаһындағы тәртиптәргә эйәрә. Кафе-бар мотлаҡ эшләп тора, ул был кистә үҙ тауарын һатырға тейеш - был ҡағиҙәне клубты арендалаған ойоштороусылар ғына үҙгәртә алмай. Шуға ла беҙ, яҡташтар ойошмалары, сараларыбыҙҙы төнгө клубтарҙа үткәрмәйбеҙ. Һуңғы йылдарҙа йәштәр тарафынан был аҙым хуплана. Бәлки, алама ғәҙәттәре булған йәштәр беҙ үткәргән сараларҙан алыҫ йөрөйҙәр...

**Өфөләге яҡташтар ойошмаларының үҙ лидерҙары ғына түгел, ә үҙенең эш йүнәлештәре, үҙ проекттары барлыҡҡа килде, тип әйтергә булалыр инде, улайһа...**

**Илнур:** Эйе, әйтергә була. Йәштәр, ысынлап та, беҙҙең сараларға дәррәү йөрөйҙәр, төрлө проекттарын тәҡдим итәләр. Һуңғы йылдарҙа яҡташтар ойошмаларының һәм уларға килеүсе йәштәрҙең һаны арта барыуы быға дәлил.

**Дим:** Шуға күрә лә яҡташтар ойошмаларының эшмәкәрлеге менән йәштәрҙе ҡыҙыҡһындырырға кәрәк. Киләсәк йәштәр ҡулында, тип әйтәләр бит. Мин быға өҫтәп, киләсәк - һау йәштәр ҡулында, тип өҫтәр инем. Беҙҙең Баймаҡ йәштәре ойошмаһы спорт ярыштары ла ойоштора. Йәштәр бик теләп йөрөй уларға. Ҡалала бик күп спорт залдары буш тора. Йәштәрҙе йыйып, шуларҙа күнекмәләр, ярыштар үткәрергә булыр ине. Был турала уйлайбыҙ.

**Илнур:** Спорт менән шөғөлләнер өсөн һау булырға, шул уҡ ваҡытта һау булыр өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк. Эсеп, тартып йөрөгән кешенең хәле лә булмай. Спортты энергияны, көстө сарыф итә торған сара булараҡ ҡараған саҡта, дискотекалар менән бер ҡатарға ҡуйырға ярамай. Йәш кешеләр барлыҡҡа килгән дәртте спорт ярҙамында эшкә екһәң, уның негативҡа көсө лә, теләге лә ҡалмай.

Ауылдарҙа ла спорт залдары буш тора. Йәштәрҙе спорт тирәләй ойоштороу өсөн Хөкүмәт тарафынан маҡсатлы бер ҡарар, бойороҡ ҡабул итеү кәрәктер. Был ҡарар бигерәк тә урындағы етәкселәрҙе, мәҙәниәт усаҡтары хеҙмәткәрҙәрен ҡуҙғатыу өсөн кәрәк. Бернисә йыл элек ҡала мәктәптәрендә, гимназияларҙа киске спорт ярыштары үткәреүҙе контролдә тоталар ине. Күп кенә мәктәптәр әле лә был эште дауам итә. Әммә нимәгәлер был эш туҡтап ҡалды.

**Бынан бер-нисә йыл элек байрамдарҙың ниндәй кимәлдә ойошторолоуын спиртлы эсемлектәрҙең мул йә аҙ булыуы менән билдәләйҙәр ине. Бөгөн сәләмәт тормош яҡлы йәштәр һырағыҙ, араҡыһыҙ табындарға йыйыла...**



**Дим:** Былтыр Яңы йыл байрамын дуҫтар менән башҡорт аш-һыуҙары - тултырма, туҡмас әҙерләп, ҡымыҙ менән ҡаршы алдыҡ. Байрам бик матур үтте. Гармунда, гитарала уйнап, матур итеп күңел астыҡ. Байрамдарҙы ошолай итеп үткәрер өсөн теләгән һәм һине был эштә хуплаған теләктәштәрең булыуы мотлаҡ.

**Илнур:** Бөгөн күп кенә йәштәр туйҙарын да спиртлы эсемлектәрһеҙ үткәрә. Улар эскеһеҙ ҙә матур байрам ойошторорға мөмкин булыуын яҡшы аңлай. Тыпырҙатып бейей, гитара, ҡурайға ҡушылып йырлай. Айыҡ аҡыл менән бер-береһен ҡотлайҙар. Был - юғары кимәл. Һәм йәштәребеҙ араһында айыҡлыҡ модаға әйләнеп бара. Тик ата-әсәләр араһында ошоно ҡабул итмәүселәр бар. Уларҙың быуыны икенсерәк шул. Нисек инде туйҙы эскеһеҙ үткәрергә була, кеше ни әйтер, тип уйлай улар. Мин дә яңыраҡ туғандарым менән бәхәсләшеп килдем был турала. Ә шулай ҙа айыҡлыҡ һәм айыҡ йәштәребеҙ өҫкә сығыр, был мода киләсәк тормошобоҙҙа нығыныр, йәшәүебеҙ нигеҙенә әйләнер, тип ышанам.

*Бөгөн күп кенә йәштәр туйҙарын да спиртлы эсемлектәрһеҙ үткәрә. Улар эскеһеҙ ҙә матур байрам ойошторорға мөмкин булыуын яҡшы аңлай. Тыпырҙатып бейей, гитара, ҡурайға ҡушылып йырлай. Айыҡ аҡыл менән бер-береһен ҡотлайҙар. Был - юғары кимәл. Һәм йәштәребеҙ араһында айыҡлыҡ модаға әйләнеп бара. Тик ата-әсәләр араһында ошоно ҡабул итмәүселәр бар. Уларҙың быуыны икенсерәк шул. Нисек инде туйҙы эскеһеҙ үткәрергә була, кеше ни әйтер, тип уйлай улар. Мин дә яңыраҡ туғандарым менән бәхәсләшеп килдем был турала. Ә шулай ҙа айыҡлыҡ һәм айыҡ йәштәребеҙ өҫкә сығыр, был мода киләсәк тормошобоҙҙа нығыныр, йәшәүебеҙ нигеҙенә әйләнер, тип ышанам.*

**Тимәк, оло быуынға сәләмәт тормош буйынса үҙ дәғүәләрен белдерерлек йәштәр бар, иншалла. Эскелек ата-әсәләр тарафынан әлегә тулыһынса инҡар ителмәгән. Шулай булғас, йәштәргә ниндәй өлгө хаҡында һүҙ булыуы мөмкин!? Ҡайһы берәүҙәр, йәштәр ололар әйткәнгә ҡолаҡ һалмай, әйткәндә лә тыңламай, тип зарлана. Бәлки, йәштәр күңелендә ата-әсәләре, өлкән быуын алып барған тормошҡа протест тойғоһо уяныуы яҡшы күренештер ул...**

**Илнур:** Эйе, беҙҙең быуын ҡайһы бер өлкәндәрҙең эсеүенән ғибрәт алып та эсмәй. Хәҙер күптәребеҙ өлкәндәрҙең ҡунаҡтарҙы эске менән һыйлау йолаһына ҡаршы сыға. Психологтар, тормошоңдо үҙгәрткең килә икән, үҙеңде яҡшы яҡҡа үҙгәрт, ти. Был дөрөҫ, минеңсә. Шул саҡта ғына һине тик яҡшы кешеләр уратып аласаҡ. Әгәр ҙә һин рухи яҡтан бай кеше икән - эргә-тирәңә тап шундай кешеләр йыйыласаҡ.

**Дим:** Бала саҡтан ата-әсәйҙәребеҙ беҙгә эсмәгеҙ, тартмағыҙ, тип әйтә килде. Әммә үҙҙәре өйгә ҡунаҡ килһә, шул шешәһен һөйрәп сығарҙы, үҙҙәре лә ул шайтан һыуын тәмләүҙән баш тартманы. Бына шундай парадокстар эсендә тәрбиәләнде инде бөгөнгө йәштәр.

**Илнур:** Берәү ҙә үҙ балаһына яуызлыҡ теләмәй. Кем генә булмаһын - балаһын һау-сәләмәт кеше итеп тәрбиәләргә тырыша. Әммә бик һирәктәр генә үҙҙәре яҡшы өлгө күрһәтә ала...Тимәк, өлкән быуын да үҙгәрергә тырышырға, шулай уҡ айыҡлыҡты мода итеп алырға тейеш...

**"Атаңдың ғына улы булма, халҡыңдың да улы бул" тигән мәҡәл бар. Бәлки: "Халҡыңдың ғына шәхесе булма - балаларыңдың да шәхесе бул" тип әйтергә кәрәктер? Атайҙарға ҡарата Ғәни Байымов атлы уҙаман: "Ата кеше шәхес булырға тейеш. Халҡы өсөн генә түгел. Иң тәүҙә балалары алдында лайыҡлы урын биләһен ул. Шул саҡта ғына уны үҙ халҡының азаматы, тип атарға була. Сөнки ул - халыҡ киләсәген тәрбиәләүсе", - тигәйне...**

**Илнур:** Атай кеше халҡы алдында ниндәй генә бөйөк ҡаҙаныштарға эйә булмаһын, балалары алама юлда икән - уның барлыҡ ҡылған эштәренең ҡәҙере китә. Ҡайһы бер билдәле кешеләрҙең халҡы өсөн эшләгән эштәре һанап бөткөһөҙ. Шул уҡ ваҡытта улына биргән атай тәрбиәһенә тәүбә итерлек бит. "Ишандан нишан тыуған" тигән мәҡәл дә бөгөнгө көндә актуаль.

Йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашҡан кеше булараҡ, күп кешеләр менән аралашырға тура килә. Беҙ һөйләгән һүҙҙәр ҡайһы бер егеттәргә алама ғәҙәттәре менән хушлашырға ярҙам итте. Был хаҡта үҙемә килеп рәхмәт әйтеүселәр булды. Был минең өсөн дә, яҡташтар ойошмалары өсөн дә иң ҙур баһа, тип ҡабул итәм. Киләсәктә был эште тағы ла дәртләнеп дауам итергә стимул барлыҡҡа килде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер фәһемле хәл. Дүрт маймылды тар ғына ситлеккә бикләп, өҫкә, ынтылғанда буй етерлек урынға банан элгәндәр. Береһе бананды күреп, алайым, тип ынтылған ғына икән, уларҙы күҙәтеүсе кешеләр барыһын да шлангынан һалҡын һыу менән ҡойондорған. Күпмелер ваҡыттан һуң тағы бер маймыл бананға ынтылып ҡараған. Һөҙөмтә шул уҡ - һалҡын һыу "душ"ы. Бер маймылды ситлектән сығарып, уның урынына икенсе маймылды индергәс, уныһы ла бананға үрелгән. Шул ваҡыт был ынтылыштан һуң барыһы ла һалҡын һыу менән ҡойондоролаһағын яҡшы төшөнгән башҡа маймылдар уны туҡмай башлаған. Быны ла теләгәненән һүрелдергәндәр. Күпмелер ваҡыттан һуң ситлектәге һыу менән ҡойондороуҙы татыған дүрт маймылдың барыһы ла башҡа маймылдар менән алыштырыла. Әммә һыу менән ҡойондоролмаған яңы маймылдар ҙа баяғы бананға үрелмәй икән. "Сөнки был ситлектә тәртип шулай", тигән фекерҙе киткән маймылдар яңыларының аңына нык һеңдереп ҡалдырған булған... Фәһеме тураһында үҙегеҙ баш ватығыҙ.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ әңгәмә ҡорҙо.

✓ Сит ил матбуғат баҫмаларында материалдар баҫылып сыҡҡанға күрә, улар беҙҙең турала яҡшы белә. Ҡайҙа ғына булһаҡ та беҙҙе "Уфа" йәки "Башҡортостан" тип алҡышлап ҡаршы алалар.



тапты. Унан белдекле генә итеп:

-Апай, һеҙгә нисә йәш әле? - тип һораны.

-Ҡырҡ һигеҙ...

-Күремегеҙ киләме әле?

-Һуңғы ваҡытта килгәне лә юҡ шикелле, ике ай булалыр...

-Һеҙҙең климакс башланған, апай.

-Кли-макс-с...

Еңелсә ауырыҡһына биреп йөрөүенә күнегеп тә бара ине инде ҡатын. Бөркөү йәйҙең тәүге көндәрендә, тәҙрә төптәрендәге гөлдәргә һыу ҡойоп йөрөгән ерҙән, ҡапыл эйелгән ыңғайы, ҡорһағының өсҡө өлөшөндә генә нимәнеңдер һыу эсендәге балыҡ шикелле ҡымырйып тулап киткәненән тертләп, ҡулындағы сүмесен төшөрөп ебәрҙе. Үҙе "Ах!" итеп сүгәләп төштө лә, ҡурҡышынан усы менән ауыҙын ҡапланы. Оҙаҡ, бик оҙаҡ ултырҙы Сания шул урынында. Ҡулдары һуңғы ваҡытта ҡалынайып киткән билен, ҡата төшкән эсен ҡапшаны, мейеһенән йөҙ төрлө уй үтте. "Китсе! Юҡтыр-юҡтыр... булыуы мөмкин түгел!.. Әгәр ҙә ысынлап...Юҡ-юҡ! Климакс тигәне ошолай булалыр... Ә нимәнe ҡыбырлай һуң? Әллә икенсе берәй ауырыу микән? Рак булып ҡуйһа?.."

Ҡабаттан фельдшер ҡыҙға барып торманы - оялды. Бабайына: "Районға барып, анализ бирергә ҡуштылар",- тине лә, юлға сыкты. Үҙенә ниндәй врач кәрәклеген тоҫмаллап, ҡатын-ҡыҙҙар өйкөләшкән кабинетҡа сиратҡа баҫты Сания. "Минең йәштәгеләр бында йөрөмәйҙер инде", тип тартынып ҡына килһә, бында йәше лә, ҡарты ла тигәндәй, ҡайнашып йөрөй. Һәр кемендә һәр төрлө сәбәптәр, күрәһең. Ҡорһаҡтары мороңдарына еткән йөкләләр ҙә, сырайҙары һытылып ауырып ултырғандар ҙа, моңһоҙ ғына хәбәр һатҡандар ҙа байтаҡ.

-Нимә борсой? - Врач, утыҙ-утыҙ биш йәштәрҙәге ҡатын, яҙып ултырған ҡағыҙынан күҙен айырмай ғына ғәҙәти һорауын бирҙе.

-Борсомай ҙа... күренәйем тигәйнем...

-Сисенегеҙ, креслоға менеп ятығыҙ.

Медсестраның һорауҙарына бутала-бутала яуап биргән арала ҡатын креслоға үрмәләне. Ул арала ҡулдарына аҡ бирсәткәләрен һуҙғылап кейеп, ялтыр тимер-томорҙарын тотоп, янына килеп баҫҡан врач, үҙ эшенә керешә:

-Тынысланығыҙ, эсегеҙҙе ҡатырмағыҙ. Эһе... тәк... тәәк... Ҡатырмағыҙ эсегеҙҙе! Эһе... Бә-әй! Нинә ауырлы икәнегеҙҙе әйтмәйһегеҙ?

-...

-Һеҙҙән һорайым бит? Был ниндәй йәшенмәк уйнау?

- ...

Ҡаты тексәйеп торған врач, ауыҙына һыу уртлаған дай булып ҡатып яткан ҡатындан яуап ала алмаҫын аңланы булһа кәрәк, ҡәтғи генә итеп:

-Төшөгөҙ, кушеткаға ятығыҙ. Айгөл, ауырлыны учетҡа ал, анализдарға йүнәлтмә яҙ, - тип, уңлы-һуллы күрһәтмәләр бирҙе лә, тәпәш топсанға күсеп ятҡан Санияның ҡорһағын тағы ла унан-бынан ауырттырып баҫҡыларға, тотҡоларға керешә.

-Нисәнсе ауырығыҙ?

-Беренсе...

Был юлы врач телһеҙ ҡалды, аптырауы йөҙөнә, ышанмауы күҙҙәренә сыкты:

-Нисек инде, бер ҙә ауырға ҡалмағайнығыҙмы ни?

-Бер ҙә.

-Ирегеҙ бармы?

-Булғайны... үлде... дүрт йыл элек...

-Мин һеҙҙе аңламайым. Әле нимә, дауаланғайнығыҙмы?

-Юҡ та... икенсе бабайға барғайным. Тәүге ирем менән егерме ете йыл йәшәнек... балабыҙ булманы...

Врач күҙлеген танау буйына төшөрә биреп, ҡарашын күтәрҙе:

-Тикшерелгәйнегеҙме?

-Мин - эйе. Ирем йөрөмәне инде.

-Һеҙгә нимә тигәйнеләр?

-Барыһы ла һәйбәт тигән булғайнылар былай...

-Шулай булғас, - врач тағы ла "аңлашыла инде" тигән мәғәнәлә яурындарын күтәрҙе.

-Аптырайым шул... Иремдең ситтә балаһы бар, тигәйнеләр.

-Улары хаҡында белмәйем, апай, бер ни ҙә әйтә алмайым, әммә факт - һеҙ түлле һәм әлеге көндә, яҡынса сама менән, ун ете-ун һигеҙ аҙналыҡ йөк йөрөтәһегеҙ һәм һеҙгә, - врач "һеҙгә" тигәнгә айырым баҫым яһаны, - йәшегеҙҙе иҫәпкә алып, икеләтә-өсләтә һаҡланып йөрөргә кәңәш итәм.

Ҡайтыуға автобусты көтөп торманы Сания. Автобустағы халыҡты күреп, кемдәрҙер менән һөйләшеп торорлоҡ хәле лә, теләге лә юҡ ине. Тау аша туранан йәйәү атланы. Район үҙәген көсҡә сығып етеп, кеше күҙенән ситләшкәс тә, ҡыҫтап килгән йәштәренә юл ҡуйҙы. Бер ҡатлы йәшләгән дә, бушҡа үткән сәскәләй саҡтарын да, Афзалдың ураған һайын йөҙөнә бәреп, бар хоҡуҡтарынан яҙҙырған, сикләгән, баҫҡан, туҡтауһыҙ тыпылдаған тамсы иле мейеһен сүкеп торған "Кыҫыр"ын, "Мал булһаң, һине күптән тотонор инем", тип мыҫҡыллауҙарын, "Ситтә балам бар", тип күрәләтә алдауҙарын, "Китәм", тип ҡурҡытыуҙарын, кәмһетеүҙәрен, үҙенең тупылдатып бала һөйөр саҡтарында сит балаларға ҡарап өҙөлөүҙәрен бер-бер артлы иҫләй барҙы, йәштәре ике битенән ике юлаҡ субырлап аҡты ла аҡты...

Ауылға килеп ингәндә ҡатындың бит-күҙҙәрен йыйлы ел һыйпап киптергән, ҡайнар ҡояш йөрөгән наҙлап иреткән, хозур тәбиғәт һиллеге йәнен тынысландырған, күңеле буп-буш, еп-енел һәм... яңы кисерештәрға шар асыҡ ине.

*ИЖАДХАНА*

# "МИРАҪ" ХАЛҠЫБЫҘ МИРАҪЫН...

## бар донъяға таныта

**Баш ҡаланың "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле барлыҡҡа килеүенең ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыты эсендә республикабыҙҙа ғына түгел, ә сит илдәрҙә лә үҙен танытып өлгөрҙө. Бына нисәнсе йыл рәттән халыҡ-ара фестивалдәрҙә ҡатнашып, үҙҙәренең сағыу сығышы менән сит ил тамашасыларын "Ah!" иттереп йөрөп ҡайта был коллектив. Данлыҡлы ансамбль тураһында ансамблдең художество етәксеһе, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Нәфирә ИҠСАНОВА һөйләй бөгөн.**

### Бер уйҙа булғас...

"Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамблен бөгөн эшлекле, үҙ эшенә яуаплы ҡараған талантлы етәксе - Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Валерий Степанов етәкләй. Күп таланттарҙы туплаған һәм күп жанрлы ансамбль: ул үҙенә бейеү төркөмдәрен, халыҡ инструменттары оркестрҙарын һәм хорҙы берләштерә. Музыканттар, йырсылар һәм бейеүселәр "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбленең артисы тип аталыу хоҡуғы алыу өсөн ысынында ҙур һына һынау үтә. Исемебеҙ есемебеҙгә тура килеп тора: беҙ башҡорт халҡының, шулай уҡ Башҡортостанда йәшәгән башҡа халыҡтарҙың да рухи, ижади мираҫын, ҡомартҡыларын һаҡлап ҡалыу өҫтөндә эшләйбеҙ. Репертуарыбыҙҙың нигеҙен республикабыҙҙа йәшәгән милләттәрҙен: башҡорт, урыҫ, татар, мари, удмурт, сыуаш, йәһүд халыҡтарының йырбейеүҙәре тәшкил итә, беҙ уларҙы яратып башҡарабыҙ, асылында көйөнсә тамашасыға еткерергә тырышабыҙ. Бейеүҙәрҙе күбеһенсә Валерий Геннадьевич үҙе һала. Уның С.Юлаевтың тыуыуына 250 йыл тулыуға арнап З.Исмәғилевтың операһы увертюраһына һалған "Салауат" бейеүен яратып йырланылар, дәртләнеп бейенеләр. Ят бейеүҙәр һалырға кәрәк булһа, ситтән дә белгестәр саҡырабыҙ. Мәҫәлән, Анкара ҡалаһына фестивалдәргә барыр алдынан Төркиәнән Нурсач ханымды саҡырҙыҡ һәм ул беҙгә йырһыҙ башҡарыла торған "Селивки" бейеүен һалды, "Кемал паша" һәм "Дилала" йырҙарын өйрәтте. Бик шәп килеп сыкты. Тамашасылар ҙа яратып ҡабул итте. Былтыр Мәскәүҙән балетмейстер, хореограф Анучин килеп, "Мираҫ" йыр-бейеү ансамбленә йыр менән оҙатылған "Звоны России" бейеүен һалып китте.

Эшләгән эштә яҡшы команда булһа, бөтә эш алға бара, тиҙәр. "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамблендә нәҡ шундай шәп команда йыйылған: бөтәбеҙ ҙә бер уйҙабыҙ, бер эште эшләйбеҙ, кәңәш-төңөш итәбеҙ - шуға ла сығыштарыбыҙ уңышлы килеп сыға.

### Сит илдәрҙә йөрөгәндә...

Инде дүртенсе йыл рәттән һәр йәй сит илдәрҙә төрлө халыҡ-ара фольклор фестивалдәрендә ҡатнашабыҙ. Беренсе йәй Испанияны арҡырыһына-буйына йөрөп, испан халҡын хайран ҡалдырып ҡайтҡайныҡ. Был йәйҙә Франция, Италия һәм Швейцарияла булдыҡ. Сит илдәрҙә халыҡ-ара фестивалдәр шул тиклем юғары кимәлдә ойошторола. Беҙҙең сығыштарыбыҙ һәм ял итеү ваҡытыбыҙ теүәл планлаштырылған була. "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле тураһында сит ил матбуғат баҫмаларында материалдар баҫылып сыҡҡанға күрә, улар беҙҙең турала яҡшы белә. Ҡайҙа ғына булһаҡ та беҙҙе "Уфа" йәки "Башҡортостан" тип алҡышлап ҡаршы алалар, фестиваль буйы артыбыҙҙан ҡалмай эйәреп йөрөйҙәр, сәнғәтебеҙ менән ҡыҙыҡһыналар. Сит ил тамашасыларының сығыштарыбыҙҙы яратыуы беҙҙә, әлбиттә, ғорурлыҡ тойғоһо уята. Уларҙы бигерәк тә кейгән костюмдарыбыҙ ҡыҙыҡһындыра. Ысынлап та, беҙҙең ансамбль костюмдары күҙҙең яуын алып тора шул: матур, күркәм, зауыҡлы тегелгән, ә тәңкәләребеҙ, биҙәүестәребеҙ - үҙе бер хазина! Ялтырауыҡлығы ғына түгел, ә халыҡсан, милли булыуы ла уларҙы ҡыҙыҡһындыралыр, тип уйлайым, сөнки ошо фестивалдәрҙә ҡатнашҡан бөтән халыҡтар күбеһенсә ярым шәрә кейенә. Тағы ла беҙҙең костюмдар һәр беребеҙгә тап килтереп тектерелгән: еңгәй икән - еңгәйсә, килен икән - киленсә, егет икән - батырҙарса. Шуға күрә лә кейемдәребеҙ һәр кемде таң ҡалдыра.

Сит илдәрҙә сәнғәтте бик юғары баһалайҙар. Халыҡ-ара фестивалдәр йыш үткәрелеп тора, бәләкәй генә ҡалаларҙа ла тамаша залы халыҡ менән шығырым тулы була. Ни өсөн уларҙа бындай саралар йыш үткәрелеүе хаҡында ҡыҙыҡһынып һорағаным бар. "Беҙ йәш быуынды шулай мәҙәниәт, сәнғәт менән тәрбиәләйбеҙ. Улар төрлө халыҡтарҙың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәтен өйрәнеп, йырҙарын ишетеп, бейеүҙәрен күреп үҫергә тейеш", - тип яуап бирҙеләр миңә. Тағы ла. Сит ил тамашасыһы бик иғтибарлы булыуы менән айырылып тора. Үҙҙәрен бик мәҙәниәтле тоталар, концерт ваҡытында һөйләшеп ултырған берәү ҙә юҡ.

Ниндәй генә фестиваль булмаһын, беҙ һәр ваҡыт беренсе иғтибар үҙәгендә. Шулай уҡ фестивалде асыу һәм ябыу вазифаһын да һәр ваҡыт беҙгә тапшыралар. Быйыл да ҙур ихласлыҡ менән килһә йыл үтәсәк фестивалдәргә саҡырып ҡалдылар.

(Дауамы 16-сы биттә).



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘНГЕ АШТЫ... мотлаҡ аша!

■ Австралияның туҡланыу өлкәһендәге тикшеренеүҙәр үҙәге мәғлүмәттәренә ярашлы, күптәр иртәнге ашты ашамай. Тасманиялағы Мензис ғилми-тикшеренеү институты үткәргән тикшеренеүҙәр раҫлауынса, оҙайлы ваҡытҡа иртәнге аштан баш тартыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренә һәм диабетҡа килтереүе ихтимал. Тикшеренеүҙәр авторы Кайли Смит әйтеүенсә, иртәнге аш артыҡ ауырлыҡты кәметергә ярҙам итеп кенә ҡалмай, ҡандағы инсулин һәм холестеринды бер кимәлдә тота һәм шуға ла йөрәк сирҙәре һәм диабеттың үсешенә юл ҡуймай. Был тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, сәләмәт булыу өсөн иртәнге аштың әһәмиәте бик ҙур. Ғалимдар фекеренсә, ата-әсәләр балаларына яҡшы өлгө күрһәтергә һәм көндө файҙалы аҙыҡтан башларға тейеш.

■ Мурманскиҙа урынлашҡан океанариум тренерҙары "тюленетерапия" тип аталған үҙенсәлекле программа уйлап тапҡан. Океанариумдың өлкән тренеры Лариса Мусинова әйтеүенсә, был программа ете йыл элек уйлап табылған һәм ошо осор эсендә унда онкологик һәм неврологик профилле сирлеләр тюлендәр менән аралашып, сәләмәтлеген нығытҡан.

■ Нервы күҙәнәктәре кире тергеҙелмәй, тип әйткәндәрен ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Әммә был ысынлап та шулаймы һуң? Билдәле булыуынса, нервы күҙәнәге ике төркөм күҙәнәктәрҙән: нейрондар һәм нейроглия күҙәнәктәренән тора. Беренселәре нервылар туҡымаһын төп функциялар менән тәьмин итһә, икенселәре улар өсөн ыңғай шарттар тыуҙыра. Нейроглия нейрондарҙы һаҡлау һәм туҡландырыу эшен дә башҡара. Улар яҡшы бүленә лә, сөнки әллә ни ауыр функция башҡармай. Әммә нейронға әүерелгән күҙәнәк бүленеү һәләтен юғалта. Шуға ла халыҡ араһында ошондай фекер таралған да инде. Улай булғас, яңы нейрондар ҡайҙан барлыҡҡа килә? Мейелә нейрондар гиппокамп йыйырсығында урынлашҡан һаҡлағыстан тулылана. Күҙәнәктәр унан йылап сыға, олоғая. Был процесс ғүмер буйына дауам итә. Әгәр ҙә йәрәхәт һөҙөмтәһендә нейрондарҙың күп өлөшө зарарлана икән, уларҙы нейроглия алыштыра.

■ АҠШ-тың Кеше геномы милли тикшеренеү институты ғалимдары кеше тәненең ҡайһы өлөшөндә бактериялар күберәк икәнлеген асыҡлаған. Тикшереүҙә үҙ ирке менән ҡатнашыусылар бер аҙна буйы бер төрлө генә һабын менән йыуынған. Һуңынан улар бер тәүлек буйы бөтөнләй йыуынмаған һәм ғалимдар уларҙың тәненең төрлө өлөшөнән ағынты алған. Асыҡланыуынса, кеше тәнендә, ашҡаҙан-эсәк трактындағы кеүек, 1 мең самаһы төрлө бактерия йәшәй. Бактериялар беләктә күберәк (44 төрлө) табылған, ғалимдар фекеренсә, ҡулдарҙы тейешле итеп йыумау беләктәрҙең дә бысраныуына килтерә һәм унда төрлө бактериялар йыйыла.

■ Британия ғалимдары электрон почта стресс факторы булып тора, тип хәбәр итә. Социологик тикшеренеүҙәр ваҡытында яуап биреүселәрҙең 57 проценты электрон почта йәшниген асҡан һайын стресс кисереүҙәрен белдергән. Бынан тыш, респонденттарҙың 40 проценты килгән хаттарға ваҡытында яуап бирмәһә, ҙур борсолоу кисерә, ә 30 процентына хаттар шул тиклем күп килә һәм улар бөтөнләй яуап биреп өлгөрмәй. Уртаса статистик британлының ике почта йәшниге бар һәм ул уны көнөнә ике-өс тапҡыр асып ҡарарға мәжбүр, ти ғалимдар.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# АВТОМОБИЛЬ ЙӨРӨТӨҮСЕЛӘРГӘ...

## мәшәҡәттәр ҙә, сығымдар ҙа арта



### Белешмә алам, тиһәң...

Водителдәр өсөн яңы медицина белешмәләре булдырылыу менән бәйле, был документ тултырыуға күберәк ваҡыт сарыф ителәсәк, һәм улар ҡиммәтләнәсәк тә.Водителдәрҙең медицина ҡарауынан үтеүе тураһындағы белешмәләр яңы ҡағиҙәләргә ярашлы тултырыласаҡ, был РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үсеш министрлығы тарафынан раҫланған.

Документтар тултырыу өсөн хәҙер юғары дәрәжәләге һаҡлау саралары: һыу билдәләре һәм голограммаһы булған яңы бланкылар файҙаланыласаҡ. Ведомствола әйтеүҙәренсә, яңы индерелгән һаҡлау саралары яһалма документтар эшләүгә юл ябасаҡ. Был осраҡта әле ялған медицина белешмәләре һатыусы күп кенә фирмалар үҙ эшмәкәрлеген туҡтатасаҡ. Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үсеш министрлығында ризаһыҙлыҡ белдерелгән коммерциялағы медкомиссияларҙың да күптәре ябыласаҡ. Яңы белешмәне алыу элеккеһенә ҡарағанда күпкә ҡатмарланасаҡ. Хәҙер ете табип аша үтергә кәрәк буласаҡ, уларҙың һәр береһе ҡултамғаһын, тулы исем-фамилияһын күрһәтергә тейеш. Шулай итеп, белешмә алыу процедураһы бер-ике көнгә оҙаҡҡараҡ һуҙыласаҡ. Бөгөн иһә ете табипты бер белгес , мәҫәлән, баш табип йә уның урынбаҫары алмаштыра. Ул биш минут эсендә 700-ҙән алып 2500 һумға хеҙмәттәштәре өсөн ҡул ҡуя ла - эш тә бөтә. Яңы документ артынан алдашмайынса ете кабинетта ла булып сығырға, ә уның өсөн сираттарҙа ултырырға ла тура киләсәк. Бөтә докторҙарҙы ла мөмкин тиклем тиҙ үткәрергә тәҡдим итеүсе әлеге лә баяғы коммерция хеҙмәте үҙенән-үҙе килеп сығасаҡ, әлбиттә, ләкин был юлы берәүгә түгел, ә етәүһенә лә түләргә тура киләсәк.

### Хаҡтары ла хаҡтары!

Белгестәр раҫлауынса, яңы талаптар иң элек белешмәләрҙең рәсми хаҡында сағылыш табасаҡ. Асылда, был яңылыҡтар хеҙмәттәрҙең ҡиммәтләнеүенә аҡланыу аргументына әүереләсәк, ти улар. Әгәр элек бының өсөн уртаса хаҡ 500 һум торһа, хәҙер тарифтарҙы ике-өс тапҡырға күтәрәсәктәр. Икенсе яҡтан, документ юллау өсөн водителдәргә күберәк ваҡыт та кәрәк буласаҡ, сөнки бөтә табиптар аша ла үтеү үҙе генә 2-3 көнгә һуҙылыуы бар.

Элек теләһә ниндәй ГАИ бүлексәһе эргәһендә 600 һум түләп, 15 минут эсендә медицина белешмәһе алырға була ине, хәҙер бының өсөн ике-өс тапҡырға күберәк ваҡыт һәм аҡса кәрәк буласаҡ, ти водителдәр. Шуныһы ғына йыуандыра: хәҙер белешмә элекке кеүек өс йылға түгел, ә биш йылға бер генә талап ителәсәк.

### Ике тапҡыр өрөргә...

Водителдәрҙе алкоголгә тикшереү ярты сәғәттән дә кәм ваҡытты алмаясаҡ. Водителде 20 минут аралыҡ менән төрөпкәгә ике тапҡыр өрөргә мәжбүр итәсәктәр, шунан һуң ғына ул юлын дауам итә аласаҡ. Быңдай тестан баш тартыу мөмкин булмаясаҡ. РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үсеш министрлығының яңы бойороғо буйынса алкоголь миҡдарын үлсәү алкотестерҙар ярҙамында башҡарыласаҡ. 20 минутлыҡ арауыҡ менән төрөпкәгә өргәндән һуң ике тестер ҙа алкоголь миҡдарын күрһәтһә, водителгә штраф һалына һәм ул автомобиль йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм ителә. Был процедураны тиҙ генә башҡарып та, унан баш тартып, китеп барыу ҙа мөмкин түгел. Тикшереү урынынан ҡасып китеүсегә штраф ҡына түгел, бәлки, кәм тигәндә бер йылға тиклем машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм итеү ҡаралған.

Юлда теләһә кемде туҡтата аласаҡтар, бының өсөн "зигзаг" яһап хәрәкәт итеү йә булмаһа юл йөрөү ҡағиҙәһен башҡаса төрлө боҙоу мотлаҡ түгел - быны Рәсәйҙәге бөтә водителдәр ҙә белә. Хәҙер теләһә кемде алкоголгә тикшереү үткәреү өсөн туҡтатып була. Иртәнсәк эшкә ашығыусылар өсөн был ысын мәғәнәһендә "тамуҡ". "Күптән түгел шундай хәлгә осраным, төрөпкәгә өрөргә мәжбүр иттеләр, - тип һөйләй бер водитель. - Эш буйынса осрашыуға ашыға инем. Шунан алда ғына дуҫтар менән эсергә тура килгәйне. Тест ыңғай һөҙөмтә бирҙе. Ҡотолоу өсөн 3,5 мең һум аҡса сығарып тотторорға тура килде..."

Хәҙер иһә эсмәгән водителгә лә... ҡотолоу өсөн түләргә тура килмәгәйе, сөнки ваҡыт ҡәҙерлерәк. Әгәр бик ашығаһығыҙ икән, эксперттар баһаһы буйынса 500 һум түләп ҡотола алаһығыҙ.

Яңы ҡағиҙәләр менән килгән тағы бер бәлә - алкотестерҙарҙың сифаты насар булыуы. Нулдән саҡ ҡына тайпылыш булған хәлдә лә водитель эскән тип иҫәпләнәсәк. Ә был һәр ваҡытта ла ысынбарлыҡҡа тап килмәүе бик ихтимал. Мәҫәлән, кеүәҫ эскәндән һуң да алкотестер 0,01 промилле, ә 20 минуттан һуң 0,005 промилле күрһәтәсәк. Өҫтәүенә, спиртлы эсемлек эсмәгән осраҡта ла ҡанда алкоголь миҡдары булыуы бар. Мәҫәлән, Халыҡ-ара хәүефһеҙлек агентлығы (МАБ) мәғлүмәте буйынса, дүрт сәғәттән ашыу руль артында килгән кешелә тестер 0,3 промилле күрһәтеүе ихтимал. Ахыр сиктә, һәр бер приборҙың да етешһеҙлеге була. Алкотестерҙың яңылышлыҡ ебәреү күрһәткесе 0,047 промилле тәшкил итә икән. Эксперт һүҙҙәренә ҡарағанда, ауыҙҙы сайҡатҡыс ҡулланғандан һуң да алкотестер 0,3 промилле күрһәтә. Бахмурҙан һуң руль артына ултырған водитель дә шундай уҡ күрһәткескә эйә.

Хәҙер йышыраҡ иртәнге сәғәттәрҙә, кеше эшкә ҡабаланғанда йә булмаһа, йома, йәкшәмбе көндәре дачаға барып-ҡайтҡан мәлдәрҙә түләүселәр һаны артасаҡ. Ә штрафтар 500 һумдан бик тиҙ генә 2-5 мең (эсмәгән, ләкин ҡабаланған кеше өсөн) һәм 5-10-15 меңгә тиклем (руль артына эскән килеш йәки бахмурҙан ултырғандар өсөн) артасаҡ. Юлдарҙа, шулай итеп, ысын мәғәнәһендә коррупция хөкөм һөрәсәк. Эсмәгән водитель өсөн ошондай хәлдәрҙә берҙән-бер ҡотолоу юлы - эшкә ҡул һелтәп булһа ла медкомиссияға барып, дөрөҫләтеү үткәреү. Ә был тотош көнөң юғалды, тигән һүҙ.

### Башҡаса алдырырҙар

Водителдәрҙе алкоголгә тикшереүҙең яңы процедураһына ярашлы, клиник күрһәткестәр, ғөмүмән, иҫәпкә алынмаясаҡ. Ә элек водителдең хәлен билдәләү өсөн клиник тикшереү ҙә оҙаҡ ваҡыт буйы мөһим әһәмиәткә эйә булып килде.

Сайҡалып атлау, бәйләнешһеҙ телмәр, сәләмәт булмаған йөҙ һәм башҡа шундай билдәләр водителде иҫерек тип әйтеү өсөн нигеҙ булып тормаясаҡ. "Карар" сығарғанда фәҡәт алкотестер һөҙөмтәһе генә иҫәпкә алынасаҡ.

Ғәйепһеҙҙән "ғәйепле" водитель өсөн иһә ҡабаттан тикшереү үтеү ҡотолоу сараһы булып тора. Мәҫәлән, рулгә ултырыр алдынан кеүәҫ йәки кефир эскән икән, тәүге тестер алкоголь миҡдары күрһәтһә лә, 20 минуттан ул юҡҡа сығасаҡ һәм һеҙҙе ебәреүҙәре лә бар, ләкин ваҡытығыҙҙы юғалтыу менән ризалашырға тура киләсәк.

### Һандар ни һөйләй?

2 йыл - руль артына иҫерек килеш ултырған өсөн водителдең шул ваҡытҡаса машина йөрөтөүҙән мәхрүм ителеүе бар.

15 тәүлек - иҫерек килеш йәки водитель таныҡтамаһыҙ машина йөрөткән өсөн ошо ваҡытҡаса ҡулға алыныуы ихтимал.

12.326 - ЮХХДИ мәғлүмәттәре буйынса, былтыр Рәсәйҙә иҫерек водителдәр ғәйебе менән шунса юл-транспорт ваҡиғаһы булған.

2 мең кеше былтыр Рәсәйҙә иҫерек водителдәр ғәйебе менән автоһәләкәттә яҡты донъя менән хушлашҡан.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА** әҙерләне.

*ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК*



# МӨЖӘҮИР ХӘҘРӘТ -

## башҡорттоң бөйөк әүлиәһе

### Вазифа апай һөйләгәндәр

Алда Рәхмәтулланың ике йомошо бар, тигәйнек. Бик яратҡан бер туған энеһе Шәрифулла һуғыштан һуң ҡайтып ҡына күренә лә, ҡырға сығып китә һәм шул китеүҙән инде өс йылға хәбәрһеҙ юғала. Шәрифулла туғаныһының хәлен белергә ярҙам итмәсме икән хәҙрәт, тип уйлай мосафир. Бер ни тиклем аралашҡан арала хәҙрәтте яҡын күреп, яратып өлгөргән Рәхмәтулла уға хөрмәтләп:

-Сөхбәт,-тип өндәшә.- Шәрифулла ҡустым тереме икән, донъяла бармы икән? Шул туғаныбыҙҙы эҙләп тапҡым килә.

-Бигерәк туған йәнле икәнһең, улым, күреп торам, энең өсөн йөрәк майың һыҙа. "Көрьән" туғандарҙың татыу булыуын хуплай, сөхбәт.- Хәҙрәттең "сөхбәт" тигән һүҙҙе тәүләп ишетеүе ине. Ят һүҙ уға ҡыҙыҡ күренде, тағы "сөхбәт" тип өҫтәп ҡуйҙы. Бер аҙҙан:

-Туғаның тере,- тине.-Барып күреп ҡал. Беҙҙә бер кис ҡуныһың да, иртәнге намаҙҙан юлға сығырһың, өйлә намаҙына энең торған ергә барып та етерһең, иншалла.

Шәрифулла ҡустым шулай яҡында ғынамы икән ни, тип уйлай Рәхмәтулла, әммә ҡабатлап һорарға баҙнат итмәй.

Иртән торғас, юлаусы:

-Олатай, ошо таяғымды ғына өшкөрөп бирһәңсе,- тип үтенә.

-Шулай тип әйтеренде алдан белдем. Ҡулындағы таяғыңды ла, башыңдағы таҡыяңды ла, өҫтөңдәге кейемеңде лә өшкөрҙөм,- ти хәҙрәт.- Тик машинаға ла, атҡа ла ултырма. Ошо тапҡырҙан йылға буйына төш тә уң яҡҡа табан атла. Күпмелер барғас, юлыңда ике саталы ҡарағай осрар. Шул тапҡырҙан өҫкә күтәрел. Тәүге осраған кешенән исемен әйтеп, туғаныңды һора. Тик юғалған энемде эҙләп килдем, тимә.

Рәхмәтулла, хушлашып, аманлашып, хәҙрәт күрһәткән яҡҡа табан атлай. Йылға буйына төшһә,әрәмәлектә әҙәм буйлыҡ айыу көпшәһе, йырып сыҡҡыһыҙ дегәнәк, ти. Бынан нисек атлармын икән, тип аптыранып торғанда, үләндәр ике яҡҡа ҡайырылып йығыла ла, алдында һуҡмаҡ хасил була. Рәхмәтулла арьяғын яҡшылап хәтерләмәй ҙә: әллә осто,әллә йөҙҙө, әллә атлап барҙы. Иҫенә килһә, бер далаға барып сыҡҡан. Ҡараһа, ҡаршыһында саталы ағас тора икән. Хәҙрәт өйрәткәнсе, ҡарағай тапҡырынан өҫкә күтәрелеп, бер аҙ барһа, ҡышлаҡ күренә. Әйләнеп ҡараһа, бер йәш ҡатын көйәнтәләп ҡоҙоҡҡа һыуға килә, ти. Тегене туктата ла һорай:

-Ошонда минең Зәйнуллин Шәрифулла тигән энем йәшәргә тейеш, белмәйһеңме, ҡарындаш?

Йәш ҡатын, ул минең хәләлем ғуй, тип, Рәхмәтулланы үҙҙәренә алып ҡайтып китә. Әле энең ҡырҙа һарыҡ көтә, хәҙер берейһен йүгертәм, ти. Ағалы-энеле ҡосаҡлашып күрешәләр, ирекһеҙҙән тәғәрәгән күҙ йәштәрен һөртәләр.

Рәхмәтулланың килеүе нәҡ Ҡорбан байрамына тура килә. Ҡаҙаҡтар өй бөрөнсә ҡорбан сала, алыҫтан килгән ҡунаҡ тип ололоҡлап, Рәхмәтуллаға хөрмәт күрһәтәләр. Бындағы йола буйынса ҡәҙерле ҡунаҡҡа ҡорбандың башын бирәләр. Мосафирҙан фатиха алабыҙ, тип, ингән бер өйҙә табында уға һарыҡ башы тотторалар. Ҡунаҡ кеше уны табындаштарына киҫәкләп, телеп-телеп һоғондорорға тейеш була. Һәр илдең үҙ йолаһы, үҙ хөрмәте. Рәхмәтуллаға ҡаҙаҡтарҙа ҡунаҡ булыу бик оҡшай,әммә ауылында уны бит ауырыу ҡатыны зарығып көтә. Ул хужаларҙан өйөнә ҡайтырға рөхсәт һорай. Ырымбурға барып, поезға ултыра. Шәрифулла ҡустыһын табыуға, уның имен-аман йәшәүенә сикһеҙ ҡыуанған мосафир бер нисә көндән ауылы Байназарға ҡайтып төшә.

Әммә ҡыуаныстары оҙаҡҡа булмай. Һарыҡ көтөп йөрөгәндә энеһе Шәрифулланың аттан ҡолап вафат булыуы тураһында хәбәр килә. Бына ни өсөн әүлиә хәҙрәт уны йәһәтләп энеһе эргәһенә ебәргән икән. Тәҡдир ағасындағы ғүмер япрағы өҙөлөргә тороуын күргән.

-Әсәйебеҙ, Аллаһы Тәғәлә ғүмерен биргәс, шәбәйҙе,- ти Вазифа апай. Уға был саҡта ун биш йәштәр тирәһе була. Шуға барыһын яҡшы хәтерләй.- Әсәй өшкөртөлгән тоҙҙо бик ҡәҙерләп, һандыҡҡа биклəп кенә һаҡланы. Беҙ сырхап-фәлән китһәк, борсаҡтай ғына итеп бүлеп ҡаптыра ине.

Тормошҡа сығып, кейәү йортона оҙатылғанда, иң ҡәҙерле хазиналай күреп, моҡсайға һалып, минә бер устай ғына тоҙ биреп ебәрҙе.-Ҡатынҡыҙҙың төрлө сағы булыр, һаҡлап ҡына тотон, - тине.

Әсәмдең әйткәнен тотоп, ул тоҙҙо бик ҡәҙерләп ологайғансы һандыҡ төбөндә генә һаҡлап йөрөттөм. Минә илле йәштәр тирәһе булғандыр. Йәй көнө ине. Балалар ҙа ҡайҙалыр сығып китеп бөткән. Эңер ваҡытында ҡапыл ауырып киттем. Ишек төбөнә ултыра төштөм дә, аяҡ- ҡулымды ла ҡыбырҙата алмай, ҡаттым да ҡалдым. Зымбырҙап ҡына барлыҡ тәнем һыуына башланы. Үлемем ошо икән, тим. Һыуынып барһам да да үҙемдең аңым дөрөҫ. Эх, һандыҡтағы хәҙрәт тоҙон алып эсергә ине, йүнәлер инем, тим. Нинә, исмаһам, балаларҙың береһе килеп инмәй икән? Аллам, ярҙам ит, әҙерәк ғүмер бир, әсәлек бурысымды үтәп, улымды-ҡыҙымды башлы-күҙле итәйемсе. Ни ғәжәп, бер аҙ ултырғас, күкрәгемдә эҫе булып китте. Аяҡ-ҡул бармаҡтарым әкренләп кенә йылына башланы. Ҡуҙғалып ҡарағайным, тороп баҫырлыҡ хәл кергән. Тәнтерәкләп булһа ла өшкөртөлгән тоҙ яткан һандығыма барып йәбештем. Алып, борсаҡтайын ҡабып ебәрҙем. Бер борсаҡтайын һыуға иҙеп, күкрәгемә, аяҡ-ҡулыма һөртөп сыҡтым. Арыуландым да киттем. Хәҙер балалар ҡайтыр, исмаһам, самауыр ҡайнатып ҡуйайым әле, тип, түрбашҡа индем. Ҡараһам, самауырым үҙенән-үҙе борхоп ҡайнап ултыра. Иҫем-аҡылым китте! Унарсы балаларым ҡайтып инде. Күмәкләп ултырып сәй эстек.

Үҙем менән, атайым Рәхмәтулла менән булған ошо хикмәтле хәлдәрҙе утыҙ йылға яҡын иҫтән сығармай,серен аңлай алмай йөрөй инем, "Мөжәүир хәҙрәт" китабын уҡып сыҡҡас ҡына барыһы ла асыҡланды. Былар барыһы ла Мөжәүир әүлиәнең хикмәттәре булған икән. Үҙе күптән арабыҙҙан китһә лә, изге заттың рухы һаман кешеләргә изгелеген эшләүҙе дауам итә. Беҙҙең мәрхүм ата-әсәйебеҙ, барлыҡ туғандарыбыҙ исеменән Мөжәүир әүлиәнең урыны ожмах түрендә булыуын теләйем. Еребеҙгә шундай бөйөк ғалимды, сер ғилеме эйәһен ебәргәне өсөн Аллаһы Тәғәләбеҙгә мәңге рәхмәтлебеҙ.

**Лира ЯҠШЫБАЕВА.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Әл-Мәжииду** - данлыҡлы, бөйөктәрҙең иң бөйөгө. Ул күп мөлкәт биреүсе һәм файҙа итеүсе. Иртәнге намаҙҙан һуң туғыҙ мәртәбә ошо исемде уҡыған кешенең ҡәрҙәштәре араһында ҡәҙер-хөрмәте артыр.

**Әл-Бәәғисү** - кешеләрҙе тура юлға күндереү өсөн пәйғәмбәрҙәр ебәреүсе һәм бәндәләрҙе үлгәндән һуң ҡабат терелтеүсе. Был исемде даими уҡыған кеше Ҡиәмәт көнөндә Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәтенә ирешер.

**Әл-Шәһииду** - һәр нәмәгә шаһит. Бер нәмә лә уның иғтибарынан ситтә тороп ҡалмай. Барыһы ла уның иғтибарына лайыҡ. Әгәр ҙә балаһы үҙенә мәрхәмәтлек күрһәтмәһә, баланың маңлайына шәһәҙәт бармағын ҡуйып, "Йәә Шәһииду" тиһә, мәрхәмәткә эйә булыр.

**Әл-Хәәҡҡу** - барлығына шиге булмаған ысын зат. Ысынбарлығын үҙенең кәлимәләре аша күндереүсе. Был исемде йыш ҡабатлаған бәндәнең юғалған мөлкәте, әйбере табылыр.

**Әл-Үәкиилү** - яҡлаусыһы, һәр изге эште һәм ғәмәлде тапшырырға лайыҡлы зат. Ул Уға тапшырыусыларҙы һәм инаныусыларҙы һөйөндөрә. Бер ҡаза килеүҙән, уттан, һыуҙан, хәүеф-хәтәрҙән ҡурҡҡан кеше был исемде уҡып, Раббыһына тапшырһа, имендектә булыр.

**Әл-Ҡәуийү** - бик көслө зат. Ҡаҡшамаҫ көс эйәһе, еңеүсе, бер ваҡытта ла онотолмаҫ. Унының көсө бөтә ҡалған көстәрҙән дә көслө. Был исемде даими уҡыған кеше Аллаһы Тәғәләнең яҡлаусыһы булыр.

**Әл-Мәтиину** - бик нығ, бер көс менән дә еңә алмаҫлыҡ зат. Үҙенең ҡарарҙарын тормошҡа ашырыуҙа бер кемдән дә мохтаж түгел. Уға ярҙамсы һәм иптәш кәрәкмәй. Һөтө булмаған ҡатынға "Йәә Мәтину" тип ризыҡ ашатһаң, һөтө күбәйер.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Бар нәмәне ыңғай итеп күҙ алдына килтереүҙең көсө

**Грек натурфилософтары илдәренең урмандары һәм йылғаларынан илһам алып, тәбиғәт характеристикаларын кеше тормошона күсергән. Шуға ла уларҙың архитектураларының һәм хатта демократияларының нигеҙендә тәбиғәт ята.**

Гректар билдәләүенсә, мөһим мәсьәләләрҙе хәл иткәндә иҫ киткес шәп уй тик генийҙарға ғына килмәй, был сифатты бар кеше лә үҙендә барлыҡҡа килтерә ала. Был илдә кешеләр төрлө дәүләт кимәлендәге мәсьәләләр хәл итеүгән йыйылыштарҙа ҡатнашырға тырышҡан, тик унан алда мотлаҡ медитацияға ваҡыт бүлгән һәм һөҙөмтәлә гениаль, йәғни, күктәр тарафынан илһамландырылған фекерҙәр әйткән.

Нимәнелер хәл итер алдынан тыныс ҡына уйланып ултырыу - ваҡытты бушҡа уҙғарыу түгел. Был осраҡта һеҙ тышҡы донъяға иғтибар итмәй, эске донъяғыҙҙы тыңлаясаҡһығыҙ. Был эске донъя - ижади хыял , илһам, балҡыш сығанағы, сөнки ул сикһеҙ аңға тәҙрә ролен үтәй.

**Беҙ Барлыҡҡа килтереүсенең рухи донъяһын ижади өлкә тип атайбыҙ. Ижади өлкәгә үтеп инеү өсөн түбәндәге күнекмәне яһағыҙ:**

1. Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ.
2. Күҙ алдына Юғары Минегеҙҙең яҡтылыҡ менән сорналған образын килтерегеҙ.
3. Уға: "Мин һине яратам", - тип әйтегеҙ.
4. Үҙегеҙҙең тойғоларығыҙ тураһында уйланығыҙ.
5. "Мин тулы аңымда" тип әйтеп, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

**Был күнегеүҙе эшләгәндә нимә тойҙоғоҙ? Күп кешеләр был һорауға шулай тип яуап бирә:**

- Мин үҙемде стрестарҙан яҡлаулы итеп тойҙом.
- Мин үҙемде Аллаға яҡыныраҡ итеп тойҙом.
- Был азатлыҡ тойғоһо ине.
- Был һүҙҙәр менән аңлатып булмаған күңел тыныслығы килде.
- Мин бөтә ҡаршылыҡтарҙы ла еңеп сыға алыуымды тойҙом.

Уларҙың фекерҙәре уртаҡ. Тимәк, эске донъяға инеп, һеҙ тик ыңғай тойғолар ғына кисерәсәкһегеҙ, ул һеҙҙең сәләмәтлегегеҙгә, етеш йәшәүегеҙгә, аңығыҙға яҡшы тойғолар кисерергә булышлыҡ итәсәк.

**Роберт СТОУН.**

*ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...*

# ҠОМҺОҘҘАР УҢЫШ ҠАҘАНА...

## Тик аҡсаға түгел, фәнгә ҡомһоҙҙар

**Рәсәйҙә онкологик сирләләрҙе дауалай белмәйҙәр, тиҙәр. Әммә Рәсәй медицина фәндәре академияһының Гематолоия ғилми үҙәгендә яман шеш ауырыуҙарының күбеһенән арындыралар. Уның етәксеһе Андрей ВОРОБЬЕВ, әгәр беҙҙең медицина хеҙмәткәрҙәре табип этикаһының ябай ғына ҡағиҙәләрен үтәһә, ә рәсәйлеләр үҙ сәләмәтлеген үҙе бөтөрмәһә, беҙ күп ауырыуҙарҙы еңә аласаҡбыҙ, тип иҫәпләй.**

**➔ Күптәр, йәнәһе, конвертҡа аҡса һалып бирмәйенсә, табип һинең менән яҡшылап һөйләшеп тә тормаясаҡ, тип зарлана...**

- Ришүәтселек эпидемияһы илдәге бөтә һөнәр эйәләрен дә аяҡтан йыҡты. Минеңсә, ауырыуҙан аҡса алыу - енәйәтселек. Уғрылыҡ. Был бит ауырыуҙың табипҡа рәхмәте йөҙөнән генә эшләнә, тип аҡлана ҡайһы берәүҙәр. Йәки: "Һәр хеҙмәткә хаҡ түләнергә тейеш", - тип тә әйтәләр. Юҡ. Шәхси табип практикаһы менән шөғөлләнергә кәрәк улайһа. Унда хеҙмәтең өсөн ауырыу ҡулынан аҡса алаһың, әммә конвертта түгел, ә рәсми рәүештә, һәм шул аҡсанан һалым түләйһең.

Мин табип булып ярты быуат самаһы эшләйем. Һеҙ һөйләгән хәл-торош һуңғы 20 йыл һөҙөмтәһе. Илдә гуманистик идеалдарға төкөрөп бирҙеләр. Элек дөйөм именлек шәхси именлеккә ҡарағанда ҡиммәтерәк ине. Хәҙер - киреһенсә. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ, һеҙгә көн һайын, күберәк аҡса эшлә, тип тылҡыйҙар. Һәм быны дефолт ваҡытында миллионлаған рәсәйлене талаған кешеләр әйтә. Улар һаман халыҡты нисек йөшөргә өйрәтә. Иртән эшкә барғанда реклама плакаты күҙгә салына: Волга буйында биләмә алырға тәҡдим итәләр. Беҙҙең Волганы шәхси ҡулдарға һаталар! Нисек инде? Киләһе плакат - һөйкөмлө ҡыҙ "ирҙәрсә" күнел асыу вәғәҙә итә. Әммә мин бер ерҙә лә "Һаулығығыҙҙы үҙебеҙҙең медицина ярҙамында һаҡлағыҙ!" тигән плакат күрмәнем. Ә бит табип ошо йәмғиәттә "кайнай" һәм бер кем дә ҡиммәттәр аҡса менән баһаланғанда идеологияға ҡаршы тора алмай.

**➔ Әгәр табиптар ауырыуҙы дауалауҙы тик килем сығанағы итеп кенә күрһә, ҡурҡыныс бит...**

- Был ауырыуҙар өсөн дә, йәмғиәт өсөн дә, тотош медицина фәне өсөн дә хәүефле, сөнки фәндә намыҫлылар һәм һатылмағандар ғына уңыш ҡаҙана. Гиппократ, табиптар тураһында һөйләгәндә, аҡсаға ерәнеү, намыҫлылыҡ һәм баҫалҡылыҡты беренсе урынға ҡуйған. 90-сы йылдарҙа мин фәнгә көн бөттө, тип уйлағайным. Әммә хәҙер күпме һәләтле йәштәр тыуҙы! Хәйер, яңы фәнни аҡыл нигеҙҙә баш ҡаланан түгел, ә ситтән аға. Миндә Мурманскиҙан, Архангельскиҙан, Еревандан, Томскиҙан, Бишкәктән, Махачкаланан, Хабаровскиҙан, Ижевскиҙан, Пермдән, Ульяновскиҙан докторҙар эшләй. Ысынлап та, фәнгә ҡомһоҙ кешеләр.

**➔ Ә бына һеҙҙең учреждениела аҡсалы конверттар алмайҙар микән ни?**

- Енәйәт өстөндә тотоу енел түгел. Ләкин миңә бер хеҙмәткәремдең шуның менән мауыға икәнлеге тураһында һүҙ килеп еткәс, мин ул институтта эшләмәһен өсөн барыһын да эшләнем. Икенсе яҡтан, дәүләт табипты, ул ғаиләһен дә ҡарай алмаҫлыҡ түбәнһетелгән хәлгә ҡуймаһын ине. Иҫемдә, 90-сы йылдарҙа дөйөм ҡыйралыу һөҙөмтәһендә беҙҙең институт ябылыу сигендә торҙо. Мәҫәлән, лаборатория мөдире айына 1-2 мең аҡса алды, был хатта транспорт сығымдарына ла етмәй ине. Ә һүҙ доньяның билдәле институттары үҙҙәренә эшкә саҡырған ғалимдар тураһында бара. Мин уларҙы ебәрә алмай инем. Германияға, коллегам Фолькер Дилга хат яҙырға оялмаһым: "Үлеп барам, миңә, исмаһам, 1-2 ай сыҙарға ярҙам ит, һуңынан юлын табырмын". Фолькер үҙ илендә кампания иғлан итеп, беҙҙең өсөн 4 зур фура медикамент, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, хатта канцлер Конрад Адэнауэрҙың ғаиләһе биргән монограммалы күлдәктәргә тиклем йыйып ебәрҙе. Беҙ тере ҡалдыҡ, ғилми мәктәптең күсәгилешлеген һаҡлап ҡалдыҡ. Хәҙер инде беҙгә тәжрибә алырға киләләр.

**➔ Ә Рәсәй провинцияһындағы клиникалар менән был тәжрибәне бүлешәһегеҙме?**

- Әлбиттә. Тап шундай юл менән илдә 90-сы йылдарҙа бала табыусы ҡатын-ҡыҙ араһындағы үлемде иҫкәртеү мөмкин булды. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: беҙҙең бала табыу йорттарында ҡатын-ҡыҙҙар Европа менән сағыштырғанда 8 (!) тапҡырға күберәк үлә ине. Гематологик үҙәк табиптары эштең нимәлә икәнен тиҙ аңланы. Һүҙ күп ҡан юғалтҡанда ябай ҡан биреү тураһында бара, был осраҡта туңдырылған плазма бирергә кәрәк. Инструкция яҙып, уның менән Рәсәйҙең бөтөн ҙур ҡалаларын урап сыҡтыҡ. Үлем ил буйынса ике, Мәскәүҙә дүрт тапҡырға кәмене.

Хәҙер ҡан системаһындағы яман шеште дауалау буйынса иҫ киткес уңыштар барлыҡҡа килде. Бынан биш йыл элек бындай ауырыуҙар үлемесле тип һанала ине. Бөгөн уларҙың 80-90 процентын дауалап була. Институттың тәжрибәһен һаулыҡ һаҡлауҙың бөтөн системаһына таратыу өсөн күптән түгел генә Медицина фәндәре академияһынан Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығына күстек.

**➔ Тәжрибәле табип булараҡ, гәзит уҡыусыларға ғүмерҙе оҙайтырлыҡ бер нисә кәңәш бирһәгеҙсе.**

- Тәмәке тартыуҙы ташлағыҙ. Рәсәй ирҙәренең төп яман шеш ауырыуы - үпкә яман шеше. Ҡояшта ҡыҙынырға ла кәңәш итмәйем. Шулай уҡ анальгин ашамағыҙ. Күпселек үҫешкән илдәрҙә был дарыуҙы күптән инде ҡулланмайҙар. Мин заманында фармацевтика мафияһы менән көрәштә еңеп сыҡтым. Миңә, был дарыу температураны төшөрә, тиерҙәр. Эйе, әммә шул уҡ ваҡытта кешене инфекция алдында иммунологик ярҙамһыҙ ҡалдыра. Бының бик насар һөҙөмтәгә килтереүе ихтимал. Температураның ныҡ юғары булғанда һыуынылыуҙың физик алымдарын ҡулланығыҙ. Еүеш простыня, араҡы менән ыуыныу, дауаханаларҙа венаға тоҙло иретмә индереү. Температураны 36,6-ға тиклем түгел, ә 38-39-ға тиклем төшөрөү ҙә етә. Парацетамол да зыянлы.

**"Аргументы и факты" гәзитенән.**

*ХОККЕЙ*

# СӘМЛЕ УЙЫН ЙӘМЛЕ

**Һуңғы ваҡытта "Салауат Юлаев" командаһы көйәрмәндәрҙе тотороҡло уйындары менән ҡыуандыра алманы, киреһенсә, йыш ҡына отолдо.**

**10 көнлөк тәнәфестән һуң континент хоккей лигаһы уйындары яңынан башланды. Юлаевсылар үҙ майҙанында Латвияның баш ҡалаһы Риганың "Динамо" командаһын ҡабул итте. Майҙан хужалары осрашыуға гәйрәтләнеп, сәмләнеп сыҡты.**

Уйын юлаевсыларҙың әүҙем һөжүме менән башланды. Ҡунаҡтар ҙа төшөп ҡалғандарҙан түгел, әленән әле Александр Еременко ҡапҡаһына ябырылдылар. Юлаевсылар беренсе осор уртаһында ғына, күпселектә уйнауҙан файҙаланып, иҫәп аса алды. Сергей Зиновьев һуҡҡан шайбаны ҡунаҡтар һаҡсыһы тота алманы. Ҡунаҡтар һөжүмде көсәйтте һәм иҫәпте тигеҙләне.

Икенсе осорҙа Патрик Торесен иҫәпте икегә еткерҙе. Күп тә үтмәй, латыштар иҫәпте йәнә тигеҙләне, ә осор тамамланыр алдынан хатта алға сыҡтылар: 3:2.

Өсөнсө осор башында ҡунаҡтар Александр Еременко ҡапҡаһына йәнә бер шайба сәпәне. Иҫәп ҡунаҡтар файҙаһына 4:2 булды.

Уйын яҙмышы ҡыл өҫтөндә ҡалды. Осрашыу ҡунаҡтарҙың еңеүе менән бөтәрмә икән ни? Юҡ, улай отолоу булмай торһон әле. Иҫәптең 2:4 булыуы майҙан хужаларын сәмләндерҙе. Юлаевсылар ысын ысыны менән көслө штурм башланы. Тәүҙә Роберт Нильсон, унан һуң Игорь Григоренко берәр шайба индереп, иҫәпте тигеҙләнеләр. Уйын бөтөр алдынан Петр Счастливый һуҡҡан шайба бәхетле булып сыҡты, бишенсе, еңеүле шайба ҡунаҡтар ҡапҡаһына ояланы. Сәмле уйын йәмле. Матч, шулай итеп, 5:4 иҫәбенә тамамланды.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**25 ноябрҙә** Стәрлетамаҡ дәүләт филармонияһы **"Башҡортостан минең алтын бишегем"** концерт программаһы менән республика филармонияларының фестивален асып ебәрә. Программала халыҡ музыка ҡоралдары оркестры, бейеү театры, эстрада артистары ҡатнаша.

**28 ноябрь** Сибай дәүләт филармонияһының ижади төркөмө **"Ун етелә күңел-күк толпар"** мажаралы юмористик тамаша тәҡдим итә.

**27 ноябрҙә** Нефтекама дәүләт филармонияһы **"Моң шишмәһе урғый йөрәктән"** концерт программаһы менән сығыш яһай.

**28 ноябрь** "Башҡортостан филармониялары фестивале"н Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы **"Мөхәббәт тантана итә..."** исемле өр-яңы концерт программаһы менән тамамлап ҡуя.

**КЕМ АЛЫҠ?**

1. Филармониялар фестивале беренсе тапҡыр нисәнсе йылда үтә?
2. Быйыл ул нисәнсе тапҡыр уҙғарыла?
3. Былтыр Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы был фестивалдә ниндәй программа менән сығыш яһаны?
4. Нефтекама дәүләт филармонияһының бейеү ансамбле нисек атала?

**Дөрөҫ яуаптарҙы белеүселәр 8-927-96-888-14 телефонына шылтыратып, саҡырыу билеттары ота ала.**

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 ноябрь** Ф. Ғафаров менән Н. Ирсаеваның концерты

**21 ноябрь "Туй"** (А. Чехов), шаярыу

**23 ноябрь "Балаҡайҙарым"** (Ә. Атнабаев), драма.

**27, 28 ноябрь "Гипнотизер"**(В. Сигарев), комедия.

**29 ноябрҙә** Салауат башҡорт дәүләт драма театры Өфө тамашасыһына Туфан Миңнуллиндың **"Риүәйәт"** хикәйәте буйынса ҡуйылған өр-яңы спектакль тәҡдим итә. Спектакль 19.00 сәғәттә башлана.

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 ноябрь "Ғимаҙи мажаралары"** (А. Әхмәтов), әкиәт. Башлана 11.00

**23 ноябрь "Студенттар"** (Н. Ғәйетбаев), лирик комедия.

**24 ноябрь "Кәлиф аист"** (В. Гауф), әкиәт. Башлана 11.00

**24 ноябрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), комедия.

**25 ноябрь "Биш кистә - бер ғүмер"** (А. Володин), драма.

**26 ноябрь "Алтын балта"** (С. Сурина), әкиәт. Башлана 11.00

**26 ноябрь "Диләфрүҙгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), тамаша.

*ИҒЛАН*

**Утерянный паспорт серия 8005 №684634, выданный 29.04.2005 Кировским РУВД г.Уфы на имя Ябусаровой Айгуль Раилевны считать недействительным.**

**Башҡортостан Республикаһының Милли көрәш һәм Билбаулы көрәш федерациялары, Төньяҡ Осетия-Аланияның Эске эштәр министры, генерал-лейтенант Артур Фәрүәз улы ӘХМӘТХАНОВтың һөйөклө әсәһе вафат булыу сәбәпле, уның һәм туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.**

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

ИЖАДХАНА

# "МИРАҪ" ХАЛҠЫБЫҘ МИРАҪЫН...

## бар донъяға таныта





(Башы 11-се биттә).

### Өҫтөнлөк - милли бейеүҙәребеҙгә

"Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбленең репертуарында башҡорт халыҡ йыр һәм бейеүҙәре айырым бер урын алып тора. Әленән-әле яңы бейеүҙәр һалабыҙ, онотолған йырҙарыбыҙҙы өйрәнәбеҙ, үҙ өҫтөбөҙҙә эшләйбеҙ. Халҡыбыҙҙың туй йолаларын сағылдырған "Йыуаса", "Еңгәләр", "Һылыу ҡыҙҙар", "Салауат", "Йәшлек" бейеүҙәрен, "Өфөләргә барһаң", "Ялсығол" кеүек башҡорт халыҡ йырҙарын, "Өс түмәр" шаян уйынын ҙурҙа ла ярата тып башҡарабыҙ, тамашасылар ҙа йылы ҡабул итә.

Үткән йылда ғына башҡорт туй йолаларын сәхнәләштереп, әр-яңы бейеү һалдыҡ. "Йыуаса" тип атаныҡ уны. Баймаҡ районынан бейеү һалыусы Салауат Ишбирҙин беҙгә үҙенең идеяларын тәҡдим итте, ә беҙ иһә уның идеяһын күтәреп алып, бейеүҙе юғары кимәлгә еткерҙек. Йоланы сәхнәләштергәндә ярҙамға сәсәниә Розалия Солтангәрәева килеп, кәңәштәрен бирҙе, йырҙар өйрәтте. Ошо бейеү әсенә халҡыбыҙҙың туй йолаһы күренештәрен сағылдырырға бейеү аша уның ихласлығын, ҡунаҡсыллығын, йомартлығын, шаянлығын асып һалырға, күрһәтергә тырыштыҡ. Бейеүҙә халҡыбыҙҙың милли ризыҡтары сәк-сәк, йыуасалар күтәреп сығып, "Йыуаса" йыры менән башлайбыҙ. Артабан тәңкә һалыуҙар, килен күреү, артыш-тартыш кеүек күнелле туй йолалары дауам итә. Бейеү барышында йыр-бейеү, уйын-көлкө менән сәхнә гөр килеп тора. Иҫ киткес күңелле килеп тора. Иҫ киткес күнелле җиреш. Ошо йоланы сәхнәләштергән ваҡытта тамашасы ла үҙен ошо ваҡиғалар эсендә тип хис итә, шул тиклем дәртләнеп, илһамланып китәләр, йырҙарға ҡушылып йырлайҙар, мөмкин булһа, тороп бейеп тә китерҙәр ине. Беҙҙең халыҡ иҫ киткес нескә күңелле бит ул: концерттарҙан һуң уларҙың күҙҙәрендә йәш тамсылары күреп, үҙемдең дә илағыларым килеп китә. Тимәк, беҙ рухлы, халыҡсан бейеүҙәребеҙ менән вайымһыҙҙарҙы уята, дәртлеләргә дәрт бирә, сәмлеләрҙе сәмләндерә алабыҙ.

Халыҡ бейеүҙәрен, йырҙарын башҡарғанда, йолаларын сәхнәләштергәндә бик иғтибарлы булырға, бәләкәй генә лә хата ебәреүҙән һаҡ булырға кәрәк, сөнки беҙҙең сығыштарыбыҙ аша нисәмә тамашасы ошо халыҡтарҙың йолаһы, ғөрөф-ғәҙәте, мәҙәниәте, сәнғәте менән генә түгел, ә холҡо, милли үҙенсәлектәре менән дә таныша.

Ҙур ғорурлыҡ менән шуны әйтеп үткем килә: сит илдәрҙә йөрөгәндә сит ил тамашасыһы нәҡ беҙҙең башҡорт йырҙарын һәм бейеүҙәрен, ҡурай моңдарын исе китеп тыңлай. Бейеүҙәребеҙҙә шул тиклем темперамент ята, тиҙәр. Һеҙҙең егеттәр бейегәндә сәхнәнән уттар сәсрәй, осондар оса, тип һоҡланалар, ҡыҙҙарҙың лирик бейеүҙәрен: "Был бит балет!" - тип баһалайҙар. Оҙон көйҙәребеҙ тураһында әйтеп тораһы ла түгел: ниндәй генә илдә булмайыҡ, халҡыбыҙҙың йырҙарын сит ил тамашасылары күҙ йәштәре менән тыңлайҙар, уны операға тиңләйҙәр.

Францияла оло кешеләргә фестивалдәр буйлап йөрөүе ауыр булғанға күрә, уларҙы храмдарға йыйып, концерт ҡуйлар. Беҙгә лә меңләгән кеше йыйылған "Святая Мария" храмында концерт ҡуйырға тура килде. Йырсыбыҙ Рәшиҙә Иҙрисова "Гилмияза"ны йырлап ебәргәйне, бөтә зал тып-тын булды, тын да алмай, күҙҙәренән йәштәр ағыҙып тыңланылар. Һуңынан: "Был бит опера!" - тиҙәр. Ә сәхнәнән беҙҙең ҡурай моңдары ағылғанда залда себен осҡан тауыш та ишетелер ине, биллаһи. Ҡурай менән нык ҡыҙыҡһыналар, килеп тотоп ҡарап, өрөп ҡарайҙар. Шул ваҡыттарҙа үҙеңдең милләтең, илең, халҡыңдың тарихы, ата-бабаларыбыҙ мираҫы, милли үҙенсәлектәребеҙ өсөн ниндәй ҙур ғорурланыу тойғоһо кисереүеңде һүҙ менән генә аңлатып бөтөрлөк түгел...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ошо көндәрҙә Конгресс-холда "Мираҫ"сыларҙың концерты шаулап үтте. Уны Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов, шулай уҡ баш ҡала, республика кимәлендәге башҡа күренекле шәхестәр, етәкселәр тамаша ҡылды. Бер тынала үткән сығыштар һәр кемде яндырып, дәртләндерҙе, күңел утына ялҡын өҫтәне. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә "Мираҫ" тигән йыр һәм бейеү ансамбленең тиҫтәләгән йылдар эшләп килгән коллективтарҙан ҡалышмай, шундай бейеклек ялауға өлгәшеүенә һоҡланырлыҡ та, аптырарлыҡ та. Бында, әлбиттә, коллективты ойоштороуға, уның матди ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә айырыуса илтифат иткән, талантларҙы тейешенсә баһалай, үҫтерә белгән Өфө ҡала округы хакимиәте, мәҙәниәт идаралығы етәкселәренең дә роле баһалап бөткөһөҙ. Афарин уларға!**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**

БАШҠАТЫРҒЫС

## НОСТРАДАМУСТЫҢ ӘЙТКӘНЕ

**3-сө башҡатырғыс**

XVI быуатта йәшәүсе бөйөк француз күрәҙәсеһе Мишель Нострадамус XX быуат башында Рәсәйҙә революция булырын, уның башланған көнөн, шул уҡ быуаттың тәүге яртыһында Европала фашизм барлыҡҡа килеп, уның башына Гитлер фамилиялы кеше баҫырын әйтә. Белеүебеҙсә, Гитлерҙың ысын фамилияһы Шиклгрубер.

**Һорау: Нострадамус үҙенән 4 быуат алдағы ваҡиғаларға бәйле был аныҡ күрәҙәлектәрҙе нисек ҡыла алған?**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Бынан алдағы һандарҙа бирелгән башҡатырғысҡа Өфөнән Алмаз Мөхәмәтов атлы егет: "Кем күргән, бәлки, Әбүғәлисинаға әмир ташлаған таш туктамағандыр?"- тип бик ҡыҙыҡлы итеп яуап бирҙе. Әүҙемерәк яуаптар эҙләйек, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, иң тапҡыр яуаптар авторҙарын Яңы йылда иҫтәлекле бүләк көтә.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ЙӘШЛЕКТӘ ӨЙРӘНӘЛӘР...

### ҡартлыҡта аңлайҙар

Йәшлек - тәбиғәт бүләге, ә ҡартлыҡ - сәнғәт әҫәре.

**(Г. Канин).**

Йәш кеше хаталар ҡыла, урта йәштәгеләр уларҙы төҙәтә, ҡарттар шул хаталар өсөн көйөнә.

**(Б. Дизраэли).**

Егерме йәштә кеше менән - теләк, утыҙҙа - аҡыл, ҡырҡта аң хакимлыҡ итә.

**(Б. Франклин).**

Йәшлек ваҡыт бик бәхетле, сөнки ул бер ни ҙә белмәй, ҡартлыҡ ваҡыт бәхетһеҙ, сөнки ул барыһын да белә.

**(Ф. Шатобриан).**

Кеше тыуған сағында нескә һәм көсһөҙ генә, ә үлер алдынан ҡаты һәм ныҡлы була. Үҫемлектәр ҙә тәүләп баш ҡалҡытҡанда нескә һәм көсһөҙ, ә үлер алдынан ҡоро һәм серек була. Ҡатылыҡ һәм ныҡлыҡ - үлемгә хас, ә нескәлек һәм көсһөҙлөк - ул йәшәй башлау билдәһе. Нескәлек һәм көсһөҙлөк көс һәм ҡеүәт алдында өҫтөнлөккә эйә...

**(Лао-цзы).**

Һәр көндөң төнө бар, һәр рәхәтлектең кире яғы бар.

**(Америка мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт:" Урманда бер аҡыл эйәһе йәшәй. Уның уҡыусылары бик күп була. Ул уҡыусыларына гел генә: "Аллаһ һәр нәмәлә йәшәй икәнен белегеҙ һәм үҙегеҙгә осраған һәр нәмә алдында баш ығыҙҙы эйегеҙ", - тип әйтә торған булған. Бер саҡ уның бер уҡыусыһы урман эсенә утын йыйырға китә. Юлда ул ҡаршыһына сабып килгән ҡоторған филде күреп ҡала. Филде артмаҡлаған кеше бер туктауһыҙ:" Юлдан ситкә кит! Фил ҡоторған!" - тип ҡыҫҡыра, ти. Әммә уҡыусы шунда остазының һүҙҙәрен хәтерләй һәм былай тип уйлай башлай: "Филдә лә, миндә лә Алла йәшәй. Бер Алла икенсеһенә зыян итә алмай ҙаһа. Шулай булғас, ниңә минә ҡасырға?" Шулай уйлап, уҡыусы урынында ҡала һәм филдә сәләмләргә әҙерләнә. Ә фил өҫтөндә ултырған кеше ҡурҡыныс тураһында иҫкәртеп, бар көсөнә ҡысҡырыуын дауам итә. Әммә уҡыусы ҡуҙғалмай һәм фил уны бар көсөнә тибеп осора. Уҡыусы ҡаңға туҙып ятып ҡала. Был хәл тураһында ишетеү менән уның остазы башҡа уҡыусылары менән йүгереп килеп етә. Уҡыусы иҫенә килгәс, остазына үҙе менән нимә булғанын һөйләп бирә. "Эйе, Алла һәр нәмәлә бар. Әммә ул филдә лә булһа, һинең менән былай хәл ҡылмаҫ ине. Фил өҫтөндәге кеше һине иҫкәрткән бит, тик һин быға ҡолаҡ һалмағаныңың..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныклыгы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәррирәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 4629